✓ *Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Таныштарығыҙ араһында 2012 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, әйтегеҙсе уларға: июлдең 17-нә тиклем яҙылһалар, гәзитебеҙҙе августан алдыра башларҙар. Индекс - 50665, биш айға яҙылыу хаҡы - 295 һум 20 тин. Шулай уҡ июлдә, августа 2013 йылдың тәүге яртыһына 2012 йыл хаҡтары менән яҙылырға була икәнен дә иҫкәртеп ҡуябыҙ.*


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

14 - 20 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№28 (498)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Атай - оло...

мин - ҙур



3

Самалап, мәҙәни эсеү...

эскелеккә ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ



6

Вәлиди беҙҙе күтәрә,



8-9 беҙ Вәлидиҙе күтәрергә тейеш

Бәхетле булыу өсөн...

үҙеңде бәхетле итеп той!



11

14 ТВ-программа


# БАШҠОРТ БӨРКӨТӨ

*Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевҡа*



*Ташишмәнең һыуы ҡеүәт бирһә,*
*Ҡанат ҡуйҙы Башҡортостаның.*
*Тар булғандыр һиңә Урал күге,*
*Күрҙе донъя ҡоштай осҡаның.*
*Ә ул осоу бары башланды бит,*
*Өс йәшеңдә атҡа менеүҙән*
*Ат ялына матҡып томоноуҙан,*
*Ата фатихаһы һеңеүҙән.*
*Ҡурҡыу белмәҫ ҡырағай ыласындай,*
*Ташланғанда дошман өҫтөнә,*
*Осоуҙы һин ябай бер эш иттең.*
*Сәсең генә көмөш төҫөндә...*
*Бөркөт ҡараш, арыҫлан йөрәкле,*
*Бер ни түгел утлы кәртәләр.*
*Тиңһеҙ яуҙа илдең батыры, тип*
*Бүләкләндең ике мәртәбә.*
*Боронғолар белеп әйткән:*

*Бәйгелә һәм яуҙа һынала.*
*Хәтәр юлдар үтеп һынатмаһың,*
*Аҫыл ирҙәр шулай дан ала.*
*"Беҙҙең Муса батыр", тип яратты*
*Яҡташтарың, Башҡортостаның.*
*Ваҡыт еткәс, ерҙән күҙәттең һин*
*Йәш бөркөттәр нисек осҡанын.*
*Башаҡтарҙың шауы, имен таңдар,*
*Шул йәш бөркөттәрҙең ҡулында.*
*Әгәр кәрәк булһа, ул бөркөттәр,*
*Осор һинең данлы юлыңдан.*
*Ә һин, Муса батыр, толпарыңда*
*Мәңгелеккә остоң уҡталып,*
*Башҡортостаныңдан ҡеүәт алып,*
*Ташишмәндән шифа-һут алып.*

***Ҡәҙим АРАЛБАЙ.***

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ТАУЫШЫН ИШЕТКӘНДӘРҘЕ...

## кеше булырға, уңыш яуларға өйрәтә

**Немруд исемле залим ҡулынан утҡа ырғытылған Ибраһим бәйғәмбәр, утты һыу тамсылары менән һүндерергә тырышҡан ҡырмыҫҡаны күреп, уның ни өсөн быны эшләүен һораған һәм: "Утты бит барыбер тамсылар менән генә һүндерә алмаясаҡһың", - тигән. "Һүндерә алмаҫымды беләм, хөрмәтле Бәйғәмбәр, ләкин залимдарҙың Һиңә ҡаршы ҡылған эштәренә ҡарата үҙ ҡарашымды белдерәм", - тип яуаплаған ҡырмыҫҡа.**

Ваҡыты менән беҙҙе уратып алған ысынбарлыҡ уны үҙгәртеүгә бер ниндәй өмөт тә ҡалдырмай. Һайлауҙар башланмаҫ элек үк кем еңере билдәле, юғары уҡыу йортона урындар һатылған, ер йөҙөнөң бар байлыҡтары айырым кешеләр ҡулында. Аңыбыҙға, һеҙ донъяны үҙгәртә алмайһығыҙ, сөнки һеҙ ел ыңғайына тирбәлгән, хәрәкәттән мәхрүм йән эйәләре, тигән фекер һалына.

Донъя һәм кешелек шулай түшөнкөлөккә батҡанда, йәмғиәт өмөтһөҙлөккә бирелгәндә, "Киске Өфө", баяғы ҡырмыҫҡа шикелле, Кеше мәнфәғәттәрен яҡлап сығыш яһай. Уның тауышы бик үк көслө лә түгелдер, уны барыһы ла ишетмәйҙер ҙә, әммә ишеткәндәрҙе ул фекер йөрөтөргә, уйланырға өйрәтә. Кешелек сифаттарын күндерә. Кемдеңдер ҡулында аҡса, власть та барҙыр, ә бына һинең ҡулыңда ихтыяр бар, ти ул уҡыусыларына. Шул ихтыярын тормошта кеше булып йәшәүгә, ҡуйған маҡсаттарына өлгәшеүгә, һәр ғәмәлдә уңыш яулауға йүнәлтергә өйрәтә.

Бер көндә генә бар мәсьәләрҙе хәл итеп булмай. Ҡайһы саҡта бер кешенең, төркөмдөң эше лә йыһан киңлегендә бәләкәй генә сүп кеүек тойола. Әммә ҙур дарьялар һыу тамсыларынан торғандай, кешелек тә айырым кешеләрҙән тора. Эйе, кеше яңғыҙы донъяны үҙгәртә алмай. Ләкин фекерҙәштәре менән булғанда көслө берекмәгә нигеҙ һала. Үҙенең ҡеүәтле көстөң бер өлөшө икәнен аңлаған кеше генә шәхес була ала. Шул шәхестәр яңы быуынды барлыҡҡа килтерә. Халҡыбыҙға, бар кешелеккә нур таратырҙай, үҙе артынан халыҡты эйәртә алырҙай шундай шәхестәр тәрбиәләүҙә "Киске Өфө"нөң дә өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Уҡығыҙ уны, башҡаларға ла уҡытығыҙ, тип өндәшке килә мөхтәрәм йәмәғәткә.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**
**Белорет районы.**



БАШ ЙОРТТА



# ҮҘҘӘРЕ БЫСРАТА ЛА...

## үҙҙәре үк бәлә һала

**Бөтә ғүмерем Өфө менән бәйле. Ошо матур һәм күркәм ҡалала йәшәүемә шатмын һәм ҡайҙалыр күсеп китеү хаҡында бер ҡасан да уйлағаным булманы. Балалар ҙа Өфөлә ҡалды. Шулай итеп, балалар-ейәндәр менән бергә шаулап-гөрләп тыуған ҡалабыҙҙа ғүмер кисерәбеҙ.**

Баш ҡаланың һәр үҙгәреше, тын алышы минең күҙ алдында үтә. Өфөнөң яҡшы яҡҡа үҙгәрештәрен күреп, күңел ҡыуана, насарҙарына йөрәк әрней. Шулай ҙа һәйбәт үҙгәрештәр күберәк, тип билдәләр инем. Мәçәлән, күпләп йорттар төҙөлә, яңынан-яңы ял итеү һәм күңел асыу урындары барлыҡҡа килә. Кеше эш менән генә йәшәй алмай, уға ял итергә лә кәрәк, ә бының өсөн төрлө мөмкинлектәр тыуҙырылырға тейеш. Был йәһәттән Өфөлә барлыҡ шарттар ҙа бар, тип әйтер инем. Бихисап кинотеатр, музей, театрҙар - барыһы ла халыҡ өсөн. Йәнең теләгәнен һайлап ал! Ә йәйге көндәрҙе иһә Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары буйындағы пляждарҙа үткәреү - үҙе бер ҡыуаныс.

Эйе, күптәр пляждар бысраҡ, тип танау бора. Ләкин уларҙың ошондай ҡот осҡос хәлдә булыуына кем ғәйепле һуң? Берәү ҙә ситтән килеп бысратып йөрөмәй, ә өфөләләр үҙҙәре ошондай "матурлыҡ" тыуҙыра. Һәм үҙҙәре үк бәлә һала. Бында ниндәйҙер ойошманы "эшләмәй", тип һүгеү урынына, күберәк иғтибарҙы үҙебеҙҙең тәртипкә йүнәлтергә һәм тейешле һығымталар яһарға кәрәк. Әгәр ҙә хужа үҙ өйөн бысраҡ тота икән, ҡайҙандыр килгән ҡунаҡҡа был шартты үтәү мөһимме? Юҡтыр. Шулай уҡ балалар ҙа ололарҙың ҡыланышын күреп үçә һәм уларҙың ҡыланышын, тәртибен ҡабатлай. Шуға күрә, әйҙәгеҙ, тәртипте үҙебеҙҙән башлайыҡ, йәмәғәт.

Һүҙемде парктарыбыҙ хаҡында дауам иткем килә. Был йәһәттән тик ыңғай фекеремде генә белдерер инем. Ысынлап та, йәшеллеккә сумған Өфө парктары тәнгә сихәт, йәнгә рәхәтлек бирә. Халыҡ та ҙур кинәнес менән йөрөй бында һәм, әйтергә кәрәк, сүп-сар ташлап, ҡыйлап йөрөүселәр ҙә бик һирәк. Шулай ҙа парктарҙа, ғөмүмән, урамдарҙа сүп һауыттарын күбәйтеү сараһын күргәндә һәйбәт булыр ине.

Һәр кемгә тыуған ере ҡәҙерле һәм яҡын, матур һәм гүзәл. Беҙгә бүләк итеп бирелгән ошо хозурлыҡты киләһе быуындарға тулы килеш ҡалдырыу беҙҙең, ололарҙың, бурысы. Шуға күрә үҙебеҙҙе лайыҡлы тотайыҡ.

**Салауат БАЯЗИТОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Юл ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штраф күләмен арттырыу менән генә был өлкәлә тәртип урынлаштырып буласаҡмы?



***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:*** БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һуңғы ултырышында "БР Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында" БР законы проекты тәүге уҡыуҙа ҡабул ителде. Тәҡдим ителгән үҙгәрештәр федераль закондарҙың камиллаштырылыуы менән бәйле ине.Был мәсьәлә федерация субъекты ҡарамағына ҡуйылған. Бик оҙаҡ бәхәсләшкәндән һәм фекер алышҡандан һуң закон ҡабул ителде, ул нисек эшләп китер - уныһын ҡарарбыҙ. Федераль кимәлдәге һуңғы закон акттарында сағылыш тапҡан юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген һаҡлау буйынса яуаплылыҡты көсәйтеү мәсьәләһенә килгәндә, беҙ уны тулыһынса яҡлайбыҙ. Ысынлап та, авариялар һанының бик ныҡ артыуы, унда ғүмерҙәре ҡыйылған кешеләр һаны илебеҙ абруйын күтәрмәй, шуға ла бындай хәлгә ил етәкселеге һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарының дөрөç мөнәсәбәте аңлашыла - кеше руль артына ултырған икән, тимәк, ул иң тәүҙә юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында ҡайғыртырға бурыслы.

***Айрат ҒӘЙНУЛЛИН, 16 йыл стажлы автоһәүәçкәр:*** Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн, атап әйткәндә, тыйылған урындарҙа туҡтаған йәки машинаны ҡуйған өсөн тейешле законға төҙәтеүҙәр бынан бер йыл элек үк индерелгәйне, тик бының өсөн яза саралары әллә ни ҡаты түгел ине: ғәйепле водитель иçкәртелә йә булмаһа уға 300 һум күләмендә штраф һалына ине. Ә шулай ҙа ошо ваҡыт эсендә тап ошо пункт буйынса кемгәлер быңдай яза саралары ҡулланылғанын хәтерләмәйем дә, ишеткәнем дә булманы. Туҡталыш, магазин йә берәй ойошма офисы янында машинаны ҡалдырып, тыныс ҡына йомоштарың менән йөрөп килергә була ине. Әле иһә ошо уҡ ҡағиҙәләрҙе боҙған өсөн штраф күләме мең ярым - ике меңгә тиклем арттырылды. Быңдай санкцияларҙы аңлап ҡабул итеү кәрәк, әлбиттә, сөнки ул машина йөрөтөүселәргә ҡаршы түгел, ә улар мәнфәғәтендә лә эшләнә бит. Бер нисә танышымдың туҡталыш янында ҡалдырып киткән машиналарын бәрҙереп китеү осраҡтарын беләм. Уйламағанда бына шундай күңелһеҙ хәлдәр, ремонт өсөн көтөлмәгән сығымдар булмаһын өсөн үҙеңә лә бик абай булыу кәрәк. Ҡайҙа бик тығын, машина күп, ундай ерҙәрҙе урап үтәм мин үҙем, йыбанмайым. Машинаны ҡуйырға иркенерәк, аулағыраҡ урын ҡарайым. Күп кеше ашыға бит, бигерәк "эшлекле" әҙәмдәр күп хәҙер. Тиҙлек заманы, нишләйһең... Ә шулай ҙа милкеңде, унан бигерәк нервыларыңды, ваҡытыңды һаҡлайым, тиһәң, абайлап, байҡап, ипле йөрөргә кәрәк - бына шул ғына. Ә былай туҡталҡа йә машина ҡуйырға рөхсәт ителгән-ителмәгән һәр бер урынды "гаишник" һағалап тора алмай бит инде. Кемдең ҡайҙа машинаһын ҡуйыуын кем тикшереп йөрөй инде? Осраҡлы рәүештә йә булмаһа махсус рейдтар мәлендә генә килеп ҡапмаһаң... Ошо арала ғына бер аҙ шауларҙар ҙа тынырҙар, онотторҙар, тип уйлайым мин, сөнки яҡшы беләбеҙ бит инде - закон ҡабул ителә тора беҙҙә, улар артынса уҡ боҙола килә, һәм беҙ шундай хәлгә күнеккәнбеҙ. Закон үтәлешен ҡарап, тикшереп йөрөгән махсус органдар булдырмайынса тороп, законды иман шартылай күреп үтәүсе граждандар тәрбиәләп булмаясаҡ, минеңсә. Унан һуң бит законды үтәү өсөн тейешле шарттар булдырыу ҙа кәрәк. Махсус рәүештә машина ҡуйыу урындары бармы беҙҙә бөтә ерҙә лә? Ҡайһы бер ҙур ғына ойошма, учреждениелар алдында алма төшөрҙәй ҙә майҙансыҡ юҡ. Шунан үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ инде ни эшләргә...

***Гөлшат ӘҘЕҺӘМОВА, йәйәүле:*** Юлхәрәкәт хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн водителдәргә ҡарата яуаплылыҡ сараларын көсәйтеүҙе мин бик хуплайым, әлбиттә, ләкин штраф менән генә уларҙы тәртипкә күндереү мөмкиндер, тип ышана алмайым. Минең кеүек бөтә ғүмере эшкә барып, эштән ҡайтыуҙан торған кешегә ҡала урамдары, юлдары, уның тығын йә иркен урындары, туҡталыштары торошо бик яҡшы таныш. Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа Өфөлә машиналар ифрат күбәйҙе: юғарынан ҡараһаң, урамдар машиналарҙан хасил ҙур бер ҡырмыçҡа иләүен хәтерләтәләр, моғайын. Кешенән бигерәк машина күп. Юлдарҙа даими машина тығыны, авариялар. Машиналар йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән иркенерәк тротуарҙарҙы ла баçып алды хәҙер. Һис бер ҡаршылыҡһыҙ йөрөйҙәр йә булмаһа тротуарҙы туҡталҡа урынына файҙаланалар.

Бер шулай коляскала сабыйын йөрөтөп килгән ҡатынға йәйәүле юлына арҡыры ҡуйылған ҡараңғы тәҙрәле ҡеүәтле "Лэнд Крузер" машинаһын урап үтеү өсөн бейек бордюрҙан төшөргә ярҙамлаштым да, машина хужаһын күреп һөйләшергә булдым. Күп тә үтмәй, ул эргәләге магазиндан тәмәке, һыра шешәләре, колбаса ҡосаҡлап килеп тә сыҡты. Мин уға тротуарға арҡыры машина ҡуйыу ярамағанлығын ипләп кенә аңлата башланым (әйтерһең дә, ул был хаҡта белмәй, әйтерһең дә, ул Айҙан төшкән!). Ауыҙ асып та өлгөрмәнем, хәшәрәт итеп һүгенеп, төкөрөктәрен сәсеп, был ир минең үҙемә ташланды. Ҡыҙмаса ла ине, буғай. Валлаһи, тотоп өҙгөсләргә әҙер, тик ҡулдары буш түгел. Шым ғына тайҙым. Шунан һуң быңдай "крутой"ҙарға бәйләнмәйем, бөтә арҡыры, ҡыйыш ятҡан нәмәләргә "күҙ йомоп" үтеп китергә тырышам. Бына шулай барлыҡҡа килә лә инде йәмғиәтебеҙҙә конформизм. Берәү һине яҡлап өндәшмәй, бөтәһе лә битараф, бәй, ә миңә ни ҡалған? Ниңә әле миңә уларҙан "насарыраҡ" булырға? Хәҙер "һәйбәт" булып йөрөйөм дә ул, барыбер аҙым һайын тәртипһеҙлектәрҙе, ғәҙелһеҙлектәрҙе күреп, ҡан ҡайнай. Законды һанламаған водителдәр өсөн күптән кәрәк ине ҡәтғи саралар күреү, тик штрафтарҙы арттырыу ғына күтәрерме икән һуң ҡайһы берәүҙәренең бик түбән хәлдәге аң кимәлен? Мин үҙем шулай уйлайым: ЮХХДИ хеҙмәтенә ярҙамға йәмәғәтселекте йәлеп итеү кәрәк. Әйҙә, булдырһындар йәмәғәтселек контроле, уға тейешле вәкәләтлектәр һәм хоҡуҡтар бирелһен, кәрәк икән, уҡытып та алһындар. Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген урамдарҙа боҙоу осраҡтарын күреп, улар шул ерҙә һәм шул моментта штраф түләүгә квитанция тултырып биреү кеүек кенә оператив сараны башҡара алырҙар ине, моғайын. Юғиһә, "гаишник"тарҙы Өфө урамдарында көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә тап итерлек түгел. Ҡайҙа китеп бөтә улар (әллә оло юл буйындағы ҡыуаҡ төптәрендә һағалаймы "табыштарын") - белмәçһең...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 12 июлдә Благовар районында үткән Баçыу көнөндә дөйөм ураҡҡа старт бирҙе. Президент игенселәргә ҡатмарлы осорҙа ярҙам итәсәк бер нисә ыңғай мәлде билдәләп үтте. Ураҡ эштәре өсөн арзан хаҡҡа яғыулыҡ һатылыуы һәм етештерелгән һөт өсөн компенсациялар түләй башланыуы ла - шулар араһында. Был яҡынса 400 млн һум. Быңдай финанс ярҙамы ауыл эшсәндәренә аномаль эçе көндәр торғанда уңышты ваҡытында йыйып алырға һәм малсыларға аяҡҡа баçырға булышлыҡ итәсәк. Ауыл эшсәндәре алдында урып-йыйыуҙы 25-30 көндә тамамлау бурысы ҡуйылды.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың Указы менән БР сәнәғәт һәм инновацион сәйәсәт министры вазифаһын башҡарыу министрҙың беренсе урынбаçары Хәлил Рәхимовҡа йөкмәтелде. Икенсе указ менән Марат Мөләков, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаçары - БР сәнәғәт һәм инновацион сәйәсәт министры вазифаһынан бушатылды.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең бойороғо менән "Өфө-Аэропорт" трассаһындағы ремонт эштәрен туҡтатып торҙо. Быға үткәрелгән экспертиза һөҙөмтәләре сәбәпсе - тикшереү барышында сифатһыҙ юл япмаһы һалыныуы асыҡланды. Асфальт ныҡлығы норманан 25-30 процентҡа түбәнерәк булып сыҡты. Президент асфальт һалыу технологияһын тиҙ арала ГОСТ-ҡа ярашлы хәлгә килтерергә ҡушты. Белгестәр әйтеүенсә, битумға юл япмаһына ныҡлыҡ биреүсе өçтәмәләр һалып бөтөрөлмәгән. Хәҙер подрядсы иçәбенә быға са һалынған асфальт урынына яңынан ныҡлыһын һалыу талап ителәсәк.

✓Өфөлә 13 июлдән 20-һенә тиклем Салауат Юлаев проспектында урынлашҡан тоннель буйлап транспорт хәрәкәте сикләнә. Киләһе аҙнала бында юл япмаһы ремонтланасаҡ. Эштәр этаптарға бүлеп үткәрелә. Билдәләнгән графикка ярашлы, киске 10-дан иртәнге 7-гә тиклем төрлө көндәрҙә тоннелдең төрлө коридорҙары ябыласаҡ. Ҡала властары водителдәргә маршруттарын алдан уйларға кәңәш итә.

✓14 июлдә Өфөнөң "Ләлә-Тюльпан" йәмиғ мәсетендә IX Бөтә Рәсәй Ҡөрьән уҡыусылар конкурсы үтәсәк. Уны Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты һәм Рәсәй ислам университеты ойоштора. Конкурсты ойоштороу комитетына 120-нән ашыу ғариза килгән.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# АТАЙ - ОЛО...

## мин - ҙур

**Тәү ҡарамаҡҡа был әйтемгә атайҙы ололау, хөрмәт итеү, уның юлын дауам итеү, васыятына тоғро ҡалыу, намыҫына тап төшөрмәү мәғәнәләре һалынған кеүек. Әммә әйтемдең "мин - ҙур" тигән өлөшө быларҙың бөтөнләй киреһен аңлатҡандай, атайҙың ололоғон инҡар иткәндәй тойола. Ысынлап та, кеше үҙенән оло булған атаһынан ҙур була аламы икән? Был атайҙың ололоғон һанға һуҡмаумы, уны танымаумы? Ни булһа ла, атайҙың һын-һыпаты кесерәйеп, төҫһөҙләнеп ҡалған кеүек. Тимәк, әйтемдең тағы ла тәрәндәрәк ятҡан мәғәнәһе барлығы бәхәсһеҙ. Шул хаҡта фекер йөрөтөп ҡарайыҡ, булмаһа.**

Беҙҙең ауылда өҫтәлдәй киң яурынлы, ике метр самаһындай оҙон буйлы, самаһыҙ ҡарыулы Дауыт Ғәйетбаев атлы олатай йәшәгән. Һөйләүҙәре буйынса, ул ҡышҡыһын тәрән көрттә санаға егелгән аты бауырынан батып туҡталып ҡалһа, тәүҙә атты туғарып, елкәһенә һалып күтәреп, таҡыр юлға баҫтырып, һуңынан санаға үҙе егелеп һөйрәп сығарыр булған. Дауыт олатай, уның ғәйрәте тураһында тағы ла бик күп төрлө лаҡаптар һөйләйҙәр беҙҙең төбәктә. Олатайҙың әле беҙҙең ауылда һәм районда йәшәүсе ейәндәренең һын-килбәтенә, булмышына, үҙҙәрен тотошона күҙ һалһаң, был һүҙҙәрҙең лаҡап ҡына булмағанына ла инанаһың. Эйе, тәбиғәт Дауыт олатай затынан буйһынды, көс-ҡеүәтте, дәрт-дарманды йәлләмәгән. Алма ағасынан алыҫ төшмәй.

Олатайҙың үҙе һымаҡ алыптай кәүҙәле Әкрәм атлы улы Бөйөк Ватан һуғышында хәрби осоусы булараҡ ҡатнашҡан. Ул ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, түшенә орден-миҙалдар, яурындарына капитан погондары тағып, ауылға ҡайтып төшкән. Уның ҡайтыуын иҫләүсе өлкәндәр был ваҡиғаның ғәжәйеп зауыҡлы, тантаналы үтеүе хаҡында һөйләй. Күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: бар ил Бөйөк Еңеүҙе байрам иткән көндәрҙә атаһы һымаҡ өфөндәй буйлы капитан, Гитлерҙы енеп, тыуған ауылы Буранбайға ҡайтып килә һәм ул, кемден-кемдең, Дауыт Ғәйетбаевтың герой улы бит! Барыһынан бигерәк, Дауыт олатайҙың күңелендәге ошо мәлдәге кисереш-шатлыҡтың ни рәүешле итеп урғылғанын күҙ алдына килтереп була торғандыр. Ни булһа ла, яу батырын армия генералын ҡаршылағандай тәбриклəп, бар ауыл халҡы байрам иткән.

Улы менән сикһеҙ ғорурланған, шатлығы эсенә һыймаған атай кеше ауыл урамында йөрөгән саҡта ла һәр ваҡыт улы менән йәнәшә атлап барырға, кеше алдында шундай улы булыуы менән ғорурланырға тырышҡан, тиҙәр. Бында атай кешенең тойғоларын аңларға була, беҙ һәр ваҡыт үҙебеҙҙең балаларыбыҙҙы ҙур, мөһим итеп күрергә тырышабыҙ инде ул. Ғөмүмән, балаларын һәр ваҡыт атай кеше ҙур кеше итеп күрергә теләй, балам минән дә ҙурыраҡ кеше булһын, күбәрәк уңышҡа өлгәшһен, тип теләй бит инде. Баланы атаһынан да ныҡыраҡ юғарыраҡ сөйгән кеше бармы икән? Юҡтыр.



Әсәйҙәргә килгәндә, хәл башҡасараҡ: улар балаһын һәр ваҡыт, нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, сабыйҙай күреп ҡурсалай. Шуға күрә лә улар балаларын ҙур күреп ҡарай ҙа алмай торғандыр. Бында әлеге лә баяғы әсәлек хисе ҡамасаулай. Беҙҙең милләт ҡатын-ҡыҙҙарына әсәлек хисе шул тиклем итеп һалынған: апайҙар ҡустыларына, һеңлеләренә, ҡәйнәләр - кейәүҙәренә, етәксе ҡатын-ҡыҙҙар ҡул аҫтында эшләүселәргә әсәй була ла китә...

Әкрәм олатайға килгәндә, һуғыштан ҡайтып, ауыл урамы буйлап йөрөгәндә ул атаһынан саҡ ҡына ситтәрәк йөрөргә тырышҡан, тип тә һөйләйҙәр шул ваҡиғаны иҫләүселәр. Һуғыштан һуңғы юҡсыллыҡ йылдарында ауыл халҡының кейгән кейем генәләре лә заманына күрә булғандыр инде. Кем белә, бәлки, атаһының кейгән кейеменән дә оялғандыр Әкрәм олатай. Улай тиһәң, үҙе ошо ауылда тыуып үҫеп, ауыр һуғыштың барлыҡ михнәттәрен татыған кеше лә булған бит ул. Тимәк, бында "оялыу" тигән һүҙ менән генә уның атаһынан ситтәрәк торорға тырышыуын аңлатып булмай торғандыр. Бында нәк "Атай -оло, мин - ҙур" тигән халыҡ аҡылы сағылалыр ҙа.

Әйткәндәй, Әкрәм олатайҙың һуғыш алдынан хәрби училищеға уҡырға инеү тарихы бик фәһемле. Беҙ уның һәм балаларының Дауыт Ғәйетбаевтың балаһы һәм заты булыуға ҡарамаҫтан, ни өсөн Фәхретдинов фамилияһын йөрөтөүенә ғәжәпләнә инек. Баҡтиһәң, хәрби училищеға инер өсөн Әкрәм олатайҙың йәше тулмаған, шуға күрә ул Фәхретдинов фамилияһына күсеп, йәшен өҫтәп яҙҙырып, үҙенә икенсе документ эшләтеп алып, шуның менән хәрби училищеға уҡырға ингән булған. Тимәк, ул атаһы оло булһа ла, үҙен ҙур итеп күрергә, күберәккә өлгәшергә теләгән. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, төбәктә физик көс буйынса иң ғәйрәтле һаналған атаһынан тик белемгә ынтылыу, хәрби һөнәргә эйә булыу юлы менән генә көслөрәк булыу мөмкинлеген аңлаған улы. Улай уйламаған хәлдә лә, ҡанында яҙылған "Атай - оло, мин - ҙур" хәҡиҡәте ошо аҙымға этәргәндер. Төпкөл ауылдағы колхозсы балаһының былдай ынтылышын башҡаса аңлатып та булмай торғандыр.

Хәрби училищены тамамлап, диплом алып, ағас сумаҙанына әйберҙәрен тултырып йөрөгән сағында Әкрәм Фәхретдинов радионан Молотовтың Гитлер Германияһының тыуған илебеҙгә ҡаршы һуғыш башлауын ишетә һәм туп-тура һуғышҡа китә. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул өс "Ҡыҙыл йондоҙ", "Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн", "Сталинградты оборонлаған өсөн" ордендарына лайыҡ була. Һуғыштан һуң да Әкрәм олатай офицер погондарын һалырға ашыҡмай, 1957 йылға тиклем илебеҙҙең төрлө урындарында авиацияла хеҙмәт итә, шунан һуң тыуған яғына ҡайтып, Баймаҡ аэродромының тәүге директоры булып китә. Пенсияға сыҡҡас, ул аэродромда диспетчер, кадрҙар бүлеге етәксеһе булып та эшләй. Вафаты - 1978 йылдың апрелендә.

Беҙ балаларҙың аталарынан күберәккә өлгәшеүенә, ҙурыраҡ маҡсат ҡуйып йәшәүенә, ә инде ейән-ейәнсәрҙәрҙең үҙ аталарынан һәм ҡартаталарынан тағы ла күберәккә өлгәшеүенә ҡәҙимгә хәл итеп ҡарап өйрәнгәнбеҙ. Был - иң ябай логика күҙлегенән ҡарағанда ла һәр бер үҫештең, прогрестың нигеҙ ташын, кешелек һәм милләт үҫешенең программаһын тәшкил итерлек, милли идея булырлыҡ күренеш. Әгәр ҙә һәр кем үҙ атаһын ололоҡлап, хөрмәт итеп, уның юлын дауам итеп, унан да ҙурыраҡ уңышҡа өлгәшһә генә кешелек тә, милләт тә алға китә аласаҡ. Киреһенсә булған осраҡта, үҫеш - түбән төшөүгә, прогресс - регресҡа тиң.

Ябай ғына миҫал: йорт старшинаһы булған, Рус армияһы сафында яуҙарҙа ҡатнашып миҙал алған, башҡорт ихтилалдарында үҙ ере өсөн айҡашҡан Юлай Аҙналиндың улы Салауат Юлаев үҙ халҡы өсөн азатлыҡ көрәшенә күтәрелеп, атаһынан да ҙурыраҡҡа өлгәшә, милли батырға, үҙ еренең символына әүерелә. Әгәр ҙә Салауат батыр үҙ улдарына, ейәндәренә, быуар-тыуарҙарына эҙмәэҙлекле рәүештә "Атай - оло, мин - ҙур" эстафетаһын тапшыра алған булһа, уларҙың заты эҙәрлекләүҙәргә дусар ителмәһә, Салауаттың хәҙерге заман нәҫелдәше ниндәй кеше булырын күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ! Был осраҡта "Атай - оло, мин - ҙур" әйтеме кешелек һәм милләт үҫешенең программаһы, милли идея ғына түгел, ғөмүмән, кешелек үҫешенең, цивилизацияһының нигеҙ ташын, быуындан-быуынға тапшырылыр эстафетаһын тәшкил итерлек мәғәнәгә эйә.

Эйе, һәр ата үҙ балаһының үҙенән ҙурыраҡ булыуына өлгәшә алғанда ғына уның тоҡомонoң киләсәге булған кеүек, кешелек тә, милләт тә шундай уҡ күсәгилешлеккә эйә булыуы фарыз. Әммә был бер ҙә атайҙан культ яһауҙы аңлатмайҙыр. Атаһына табынған кеше унан ҙурыраҡ, көслөрәк була алмайҙыр. Беҙҙең халыҡта кешегә өндәшкәндә бер ваҡытта ла Фәлән Фәләнович тип, уның атаһын ҡушып әйтмәйҙәр. Был да юҡҡа түгелдер. Ауылдашым, Бөйөк Ватан һуғышы батыры Әкрәм Фәхретдиновтың тормош юлын күҙ алдынан үткәргәндә мин ошо хаҡта уйландым.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ҡала юлдарында барлыҡҡа килгән тығындарҙы иҫәпкә алып, Өфө водителдәре хәҙер маршруттарын икенсе төрлө һайлай ала - Өфө хакимиәте сайтында "Яндекс-тығындар" сервисы эшләүсе "Карталар" бүлеге барлыҡҡа килде. Әлеге ваҡытта картаның өс интерактив режимынан "Тығындар" режимы тулы ҡеүәтенә эшләй.

✓Быйыл Рәсәйҙә 36 мең самаһы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны торлаҡ аласаҡ. Шуларҙың 2700-ө Башҡортостанда йәшәй, улар ҙа фатир һәм йорттар менән тәьмин ителәсәк. Республикала 2007 йылдан һигеҙ меңдән ашыу һуғыш ветераны торлаҡҡа сиратҡа баҫҡан. Ошо арала 5700 граждан торлаҡ алған.

✓"2011-2013 йылдарға Башҡортостан Республикаһында крәҫтиән (фермер) хужалыҡтары нигеҙендә ғаилә һөтсөлөк фермаларын үҫтереү" айырым маҡсатлы республика программаһына әле 106 ҡатнашыусы һайлап алынған. Комиссия үҙ эшен дауам итә. Программаны тормошҡа ашырыуға быйыл 103 млн һум күләмендә дәүләт ярҙамы ҡаралған. Программа тоҡомло һәм тауар малы, ҡоралмалар һатып алыуға сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплауға субсидия биреүҙе күҙаллай. Шулай уҡ электр һәм һыу менән тәьмин итеүгә бәйле сығымдар ҙа компенсацияланa.

✓Бер аҙнала ғына республиканың 708 кешеһе талпандан зыян күргән. Роспотребнадзор мәғлүмәттәренә ярашлы, йыл башынан алып республиканың дауалау-профилактика учреждениеларына талпандан тешләнгән 15598 граждан мөрәжәғәт иткән. 1 апрелдән эпидемиологтар 6734 хәүефле бөжәкте тикшергән, шуларҙың 489-ы талпан энцефалиты вирусы менән зарарланған булған (7,3%). Бөрйән, Учалы райондарында һәм Өфөлә йөмгеһе биш аҙырыу осрағы теркәлгән.

✓Нефтекамалағы һәм Өфөләге Башҡортостан таможняһы хеҙмәткәрҙәре радиоактив посылкалар тапты. "Munami Inc." фирмаһының медальондары һалынған ике бандероль да Канаданан килгән. Роспотребнадзор белгестәре медальондарҙың санитар талаптарға яуап бирмәүен раҫлай. Республика халҡы "шифалы" медальондарға интернет аша заказ биргән булған.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Энергия ресурстарын һаҡлау технологиялары индерелеү менән былтыр социаль объекттарҙы хеҙмәтләндереүҙә 15 миллион һум аҡса экономияланған. Ҡала электр энергияһын ҡулланыу күләме лә кәмей бара.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАР ХЕҘМӘТТӘР... бер урында

**Өфөлә Күп функциялы үҙәк асылды. Хәҙер граждандар справкалар йыйыу өсөн төрлө инстанциялар һәм ведомстволар тупһаһын тапамаясаҡ.**

Был үҙәк "бер тәҙрә" принцибы буйынса эшләй, унда яҡынса 60 төрлө хеҙмәт күрһәтеләсәк. Ошонда уҡ һәр социаль мәсьәләне хәл итеп буласаҡ: бала тәрбиәләү буйынса пособие юлларға, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәтен түләргә, санаторийға путевка, документ копияһын алырға, табипҡа яҙылырға мөмкин. Хеҙмәттең тулы исемлеген Үҙәктең сайтында (mfcrb.ru) табырға була. Әйткәндәй, ул артабан тағы ла киңәйәсәк.

Әлегә Күп функциялы үҙәк берәү генә һәм ул Башҡортостандың бөтөн граждандарын хеҙмәтләндерәсәк. Яҡын арала Стәрлетамаҡта, Күмертауҙа, Нефтекамала, Бәләбәйҙә, Октябрьскийҙа һәм Приютовола уның филиалдары асыласаҡ.

Үҙәктәге бар хеҙмәттәр ҙә (дәүләт пошлинаһы түләргә кәрәкләләренән тыш) бушлай күрһәтеләсәк. Ул Яңы күпер урамы, 8 адресы буйынса урынлашҡан. "Сәнғәт училищеһы" туҡталышы. Телефоны: 246-39-91, 246-39-92. Эш ваҡыты: дүшәмбе-йома, 8.00-20.00 сәғәт.

## ИҢ МАТУР ЙОРТ ӨСӨН... йөҙ мең һум

**Республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы яңы конкурс үткәрә. Уның шарттары буйынса, подъездарҙы таҙа тотҡан һәм коммуналь түләүҙәр буйынса бурыстары булмаған кешеләр йәшәгән йорттарҙың 100 мең һуң күләмендә аҡса алыу мөмкинлеге бар.**

Был конкурста ҡатнашыу өсөн йортта йәшәүселәр домком рәйесе йәки шәхси милекселәр ширҡәте (ТСЖ) идаралығына мөрәжәғәт итә. Подъездар таҙа һәм матур биҙәлгән булырға тейеш. Әйткәндәй, баһалама ағзалары йорттоң техник йыһазландырылыуына иғтибар итәсәк. Икенсе һүҙәр менән әйткәндә, йорттоң ҡыйығы, күтәрмәһе, подъезд тәҙрәләренең быялалары - урынында, йорттоң һаны, урамдың атамаһы яҙылған булырға, шулай уҡ йортта иҫәпләү приборҙары, пандустар һәм баҫҡыс яндауыры булырға тейеш. Иң мөһиме, конкурсҡа ҡатнашыу өсөн коммуналь түләүҙәр буйынса бурыстары булмаған йорттар ғына үткәрелә.

Бәйге 2012 йылдың 1 июленән 2013 йылдың 30 апреленә тиклем дауам итә. Ғаризалар 2012 йылдың 25 декабренә тиклем Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығында (Өфө ҡалаһы, Степан Халтурин урамы, 28) ҡабул ителә. Уның һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың 100 йорто 100-әр мең һум премия менән бүләкләнәсәк.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфө ҡала округы Советы депутаттары "Медицина ярҙамы күрһәтеүҙә урындағы үҙидаралыҡ органдарын дәүләт полномочиелары менән тәьмин итеү тураһында"ғы законды 2013-2015 йылға тиклем оҙайтыуҙы һорап, Башҡортостандың Дәүләт йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачевҡа мөрәжәғәт менән сығырға ҡарар итте. Был ҡарар Өфө ҡала округы Советының сираттағы, алтынсы ултырышында ҡабул ителде.**

# ӨФӨ УРАМДАРЫНА... исем бирелде

### Сәләмәтлек һағында ҡала үҙе тора

Федераль законға ярашлы, хәҙер медицина ярҙамы күрһәтеү менән бәйле мәсьәләләр төбәк ҡарамағына ҡалдырылған. Медицина хеҙмәтләндереүе төбәк бюджеты һәм федераль бюджеттан алынған субвенциялар иҫәбенә ғәмәлгә ашырыла. Тимәк, дауаханаларға муниципаль бюджеттан аҡса бүлеп булмай. Әммә икенсе федераль закон буйынса, һаулыҡ һаҡлауға бәйле айырым вәкәләттәрҙе муниципалитеттарға тапшырыу мөмкинлеге бар. Был осраҡта һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтерергә урындағы бюджеттан да аҡса бүленә ала. Өфө депутаттары уҙған йылда был мәсьәләне күтәреп сыҡҡайны инде. Медицина ярҙамы күрһәтеү менән бәйле хоҡуҡтар ҡала ҡарамағына бер йылға бирелгәйне. Социаль сәйәсәт, һаулыҡ һаҡлау һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса ҡала округы Советының даими комиссияһы рәйесе Руслан Солтанов әйтеүенсә, дүрт ай эсендә ҡала хакимиәте дауаханаларҙы ҡарауға, төҙәкләндереүгә, яңы учреждениелар төҙөүгә 40 миллион һум аҡса бүлгән. Йыл аҙағына тиклем республика субвенцияларына өҫтәмә рәүештә һаулыҡ һаҡлау системаһына ҡала бюджетынан тағы 500 миллион һум бүлеү көтөлә. Шундай ярҙам Өфөләге медицина хеҙмәтләндереүенең сифатында ыңғай сағылыш таба. Шуға ла депутаттар медицина ярҙамын күрһәтеүҙе алдағы ике йылға ла ҡала ҡарамағына ҡалдырырға иҫәп тота.

### Һыу үткәреү селтәрҙәре яңыртыла

Ҡала округы Советы ултырышында 2012-2015 йылға "Уфаводоканал" предприятиеһы эшмәкәрлеге буйынса инвестиция программа раҫланды. Уны ғәмәлгә ашырыу сиктәрендә һыу алыу ҡоролмаларын төҙәкләндереү һәм яңыларын төҙөү, һыу үткәреү һәм канализацияларҙың яңы насос станцияларын ҡороу, эсәр һыуҙың резервуар паркын киңәйтеү эштәре планлаштырылған. Быға 6,6 миллиард һум аҡса бүлеү көтөлә. Был мәсьәлә күптән хәл итеүҙе талап итә. Һыу алыу ҡоролмаларының һәм насос станцияларының ҡеүәте етмәй, шулай уҡ ҡоролмаларҙың үткәреү мөмкинлеге һыуға булған бөгөнгө ихтыяжға тап килмәй. Бынан тыш, программаның ғәмәлгә ашырылыуы яңы микрорайондарҙы һыу менән тәьмин итеү өсөн дә кәрәк.

Өфөлә энергия ресурстарын һаҡ тотоноуҙы тормошҡа ашырыу буйынса маҡсатлы программаның үтәлеше лә мөһим мәсьәлә. Был программа сиктәрендә ҡаланың бөтә күп фатирлы йорттарында һыуыҡ һәм эҫе һыуҙың күләмен иҫәпләгән ҡоралмалар ҡуйылған. Энергия ресурстарын һаҡлау технологиялары индерелеү менән былтыр социаль объекттарҙы хеҙмәтләндереүҙә 15 миллион һум аҡса экономияланған. Ҡала электр энергияһын ҡулланыу күләме лә кәмей бара. Өфө йорттарында 40 меңгә яҡын энергияны һаҡлау лампалары ҡуйылған. Электр энергияһын һаҡсыл тотоноу буйынса башҡа эштәр ҙә башҡарыла. Быға тиклем программа нигеҙҙә торлаҡ һәм предприятие милекселәре аҡсаһы иҫәбенә ғәмәлгә ашырылып килде. Совет ултырышында энергоресурстарҙы һаҡ тотоноуға ҡала бюджетынан да етерлек кимәлдә аҡса бүлеү бурысы ҡуйылды.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Совет ултырышында Дим һәм Октябрь районындағы өс яңы урамға исем ҡушылды. Нагаево ҡасабаһындағы бер урамға Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ рәссамы, атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Мөхәммәт Арыҫланов исеме биреләсәк. Был тәҡдим менән республиканың Театр эшмәкәрҙәре союзы сыҡҡайны. Кустаревское күле эргәһендәге микрорайон урамдарының береһе күренекле архитектор һәм ғалим Барый Кәлимуллин исемен йөрөтәсәк. Дим районы хакимиәте һәм "Башнефть" ветерандары тәҡдиме буйынса, шул уҡ микрорайондағы тағы бер урамды Башҡортостандың атҡаҙанған нефтсеһе Евгений Столяров исеме менән атаясаҡтар.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ЭҪЕ КӨНДӘР КӨТӘ... июлдә лә, августа ла



**Быйыл июль, август һәм сентябрь айҙары ҡоро һәм эҫе килә. Был турала журналистар менән матбуғат конференцияһында Башгидрометтың баш синоптигы Анна Козаева хәбәр итте.**

Уның әйтеүенсә, июль норманан бер нисә градусҡа йылы була, бөтөн республикала тиерлек ваҡыты менән ямғырҙар көтөлә. Әйткәндәй, Башҡортостан өсөн йәйҙең икенсе айында һауа температураһының уртаса күрһәткесе, ғәҙәттә, плюс 18 градусҡа тиң.

- Алдан күҙаллауҙар буйынса, август һәм сентябрҙә лә ошондай уҡ һауа торошо өҫтөнлөк итәсәк. Минималь күләмдәге яуым-төшөм менән эҫе көндәр тороуы көтөлә, - тине Анна Козаева. - Аграрийҙар өсөн был бик уҡ уңайлы һауа торошо түгел, әлбиттә.

Йәнә Башгидрометтың баш синоптигы һауа торошо арҡаһында йылғасылар һәм энергетиктарҙың ҙур ҡыйынлыҡтар кисереүен билдәләне.

- Ағиҙел йылғаһы күҙгә күренеп һайыға. Ә Павловка ГЭС-ында һыуһаҡлағысҡа йыйылғанға ҡарағанда күпкә артығыраҡ һыу ағыҙыла. Яҡын арала был йәһәттән хәлдәрҙең яҡшырыуы көтөлмәй, - тип белдерҙе Анна Козаева.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Өфө" халыҡ-ара аэропорты яҡын сит илдәргә осоштар географияһын киңәйтә. Быйыл күп йыллыҡ тәнәфестән һуң Украинаның баш ҡалаһы Киевҡа рейс асылды. Киләһе йыл башында Белоруссияның баш ҡалаһы Минскиға рейс асыу планлаштырыла. 2013 йылдың йәйенән самолеттар Өфөнән Ҡаҙағстанға - Алматы һәм Астанаға оса башлай. Латвияның баш ҡалаһы Рига менән дә авиабәйләнеште тергеҙеү планлаштырыла. Өфөнән шулай уҡ Ереванға, Баҡыға, Ташкент, Душанбе ҡалаларына осорға була. Алыҫ сит илдәргә осоштар теҙмәһендә Төркиәгә, Мыҫырға, Грецияға, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә, Таиланд, Чехия, Испанияға, Кипрға һәм башҡа илдәргә рейстар күрһәтелгән.

✓2012 йылдың ғинуар-майында торлаҡ йорттарҙы сафҡа индереү буйынса Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында етенсе урын биләй. Биш айҙа республикала дөйөм майҙаны 568,3 мең квадрат метрлыҡ 6000 фатир файҙаланыуға тапшырылған. Шәхси төҙөүселәр өлөшөнә дөйөм торлаҡ күләменең 85 проценттан ашыуы тура килә. Ауылдарҙа торлаҡ төҙөлөшө артыуы, ҡалаларҙа һүлпәнәйеүе теркәлгән. БР Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2012 йыл аҙағына тиклем 2,3 млрд квадрат метр торлаҡ төҙөү планлаштырыла.

✓Өфөлә 2012 йылдың алты айында 33 вакансиялар йәрминкәһе үткәрелде. Уларға эш эҙләп 19500 граждан килде. 658 предприятие һәм ойошма был йәрминкәләрҙә 12400 самаһы буш эш урыны тәҡдим итте. Вакансиялар йәрминкәһе ярҙамында тәүге ярты йыллыҡта 2100 кеше эшкә урынлашты.

✓Тәбиғи парк исемен алған Ирәмәл киләһе йәйгә тиклем ябыла. Ошо ваҡыт арауығында унда ҙур үҙгәрештәр буласаҡ. Парк етәкселеге территорияны үҫтереү планын эҙерләгән, әле ул экологтарҙа экспертиза үтә. Әгәр экологтар фатиха бирһә, бында яңы 30 туристик туҡталҡа ойоштороласаҡ, яңы маршруттар асыласаҡ. Быға тиклем Ирәмәлгә йылына 10 мең кеше килһә, был һанды киләсәктә 17 меңгәсә еткереү планлаштырыла. Быны өсөн, әлбиттә, инфраструктураны: ҡунаҡ өйҙәрен төҙөү, тау саңғыһы трассаһын эшләү, үҙенсәлекле күңел асыу маршруттарын үҫтереү кәрәк.

АЛДАЙҘАР!

# ИНТЕРНЕТ - МУТЛАШЫУСЫЛАР ҘА...

## тишек шымаңға ултырта ала



**Һуңғы ваҡытта республикала интернет-мутлашыусыларҙан зыян күреүселәр һанының артыуы күҙәтелә. Киберенәйәтселәр күп осраҡта сит илдә йәшәй, шуға күрә бындай енәйәт эшен тикшереү Интерпол каналын ҡулланып башҡарыла.**

Интернет - төрлө афералар эшләү өсөн төпһөҙ мискә. Интернеттың асыҡ булыуы һәм, иң мөһиме, юридик яҡтан һаҡланылмауы яңынанаңы енәйәти хәйләләрҙең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Киберенәйәтселәргә яуаплылыҡтан ҡасыу өсөн ялған исем һәм документтар ҡулланыу, йәшәгән илдәренең ҡануниәт үҙенсәлектәре, сит ил банктарынан аҡса күсерелгән иҫәп хужалары хаҡында мәғлүмәт алыуҙың юридик ҡыйынлыҡтары, енәйәт эштәре буйынса хоҡуҡи ярҙам алыуға халыҡ-ара запрос яһауҙың оҙаҡ ваҡытты алыуы ярҙам итә. Енәйәтселәр һәр аҙымын уйлап, ентекле схема төҙөп, төрлө халыҡ-ара системаларҙы ҡулланып һәм аҡса күсереүҙең ҡағыҙәләрен ентекле өйрәнеп эш итә.

Мутлашыуҙар башлыса сит ил машинаһын, шулай уҡ *HTC* коммуникаторҙарын, *iPhone* телефондарын һәм *iPad* планшеттарын һатыуға ҡайтып ҡала һәм күп осраҡта *Western Union*, *MoneyGram* һәм башҡа аҡса күсереү системалары, йәғни шул уҡ Интернет аша, йәки бер көнлөк фирмалар иҫәбенә аҡса күсереү юлы менән башҡарыла.

Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының Интерпол милли үҙәк бюроһы бер-нисә мутлашыу осрағын анализлағандан һуң, енәйәтселәрҙән зыян күрмәҫ өсөн ғәмәли кәңәштәр әҙерләгән. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһында йәшәүсе интернет сайтында автомобиль һатыу хаҡында иғлан күрә. Автомобиль хужаһы Италияла йәшәүе һәм машинаны Рәсәйгә үҙе алып килеү мөмкинлеге хаҡында белдерә. Бының өсөн һатып алыусы 5 мең АҠШ доллары күсерергә һәм квитанцияның күсермәһен һатыусының электрон йәшнигенә ебәрергә генә тейеш була. Шул уҡ ваҡытта мутлашыусы һатып алыусыға аҡсаны тура үҙенең иҫәбенә түгел, ә берәй яҡын туғаны исеменә күсереү мөмкинлеге хаҡында ла белдерә. Ҡаза күреүсе аҡсаны Италияла йәшәүсе бер туған ағаһы исеменә күсерә һәм квитанция күсермәһен автомобиль һатыусының электрон адресына ебәрә. Оҙаҡламай аҡса Италияла билдәһеҙ мутлашыусылар ҡулына күсә һәм улар менән бәйләнеш тә өҙөлә. Шулай итеп, өфөлө аҡсаһыҙ ҙа, машинаһыҙ ҙа тороп ҡала. Был мутлашыуҙа ҡулланылған *Western Union* системаһы буйынса аҡса алғанда күсерелгән сумманы һәм аҡса күсереүҙең контроль номерын ғына белеү ҙә етә, ә аҡсаның кем исеменә күсерелеүе мөһим түгел. Бөтә мәғлүмәт мутлашыусылар һораған аҡса күсереүгә яҙылған ғаризала күрһәтелгән була. Был система буйынса аҡса күсергәндә уны бер-нисә минуттан уҡ алырға була һәм һуңынан инде бер нисек тә кире ҡайтарып булмаясаҡ.

Интернет мутлашыуҙар күп төрлө булһа ла, уларҙың бер-нисә дөйөм билдәһе бар:

- тәҡдим ителгән тауар бик арзан хаҡҡа һатыла;
- һатыусы тауар өсөн аҡсаны 100 процент күләмдә һәм күп осраҡта әйтеп үтелгән системалар аша күсереүҙе һорай;
- ҡайһы саҡта хатта хәүефһеҙ аҡса күсереү, йәғни шәхесте раҫлаусы документ урынына бары тик контроль һорау ҡулланыу юлын тәҡдим итә;
- мутлашыусы һатып алыусының ышанысын яулау өсөн оҙаҡ эшләргә мөмкин. Ул һатып алыусының электрон йәшнигенә шәхесен раҫлаусы документтың йәки водитель танытмаһының күсермәһен ебәрергә, дөйөм ҡыҙыҡһыныуҙарҙы табырға һәм үтә лә осһоҙ хаҡ тураһында һорауҙарға дәлилле яуаптар табырға мөмкин.

Интернет селтәре аша һеҙгә төрлө тауар тәҡдим итергә мөмкиндәр һәм уларҙың ялған булыуын асыҡлауы бик ауыр. Ләкин ҡайһы бер һаҡланыу сараларын онотмағанда, күңелһеҙ ваҡиғаларға тарымаҫҡа мөмкин. Үҙегеҙгә ят булған сайттан тауар алырға теләгәндә уның хаҡында тулы мәғлүмәт алырға тырышығыҙ. Шулай уҡ киң билдәле сайттарҙағы иғландар менән эш иткәндә лә һаҡ булыу ҡамасауламаҫ. Һеҙҙә үтә лә арзан хаҡ, шулай уҡ һатыусының фактик адресы һәм телефоны булмауы ла шик уятырға тейеш. Тауар һатып алғанда, курьер хеҙмәте менән ҡулланығыҙ һәм тауарҙы ҡулығыҙға тотторғас ҡына түләгеҙ.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ПОЛИЦИЯ МЕНӘН...

## нисек эш итергә?

**Һәр кем ниндәй ҙә булһа хоҡуҡ боҙоуҙың шаһиты йәки енәйәт ҡорбаны булырға мөмкин. Был осраҡта "02" телефоны буйынса полиция бүлегенә шылтыратырға кәрәк.**

Шылтыратыуға яуап биреүсе операторҙың һәр һорауына тулы яуап бирергә тырышығыҙ: хәл-ваҡиғаның урыны, ваҡыты, енәйәтсенең айырым билдәләре, енәйәттең үҙе - барыһы ла бик мөһим факторҙар. Артабан нисек эш итеү тәртибен оператор бирген күрһәтмәләргә ярашлы координациялағыҙ. Полиция бүлегенә ғариза биреүҙең икенсе юлы - яҡындағы эске эштәр органына мөрәжәғәт итеү. Унда хәбәрҙәр тәүлек әйләнәһенә ҡабул ителә.

Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: хоҡуҡ боҙоуҙың урыны һәм ваҡытына, шулай уҡ мәғлүмәттең тулы йәки тулы булмауына һәм хәбәр ителеү юлына ҡарамай, енәйәт йәки башҡа төрлө мәғлүмәт хаҡында хәбәрҙәр бөтә эске эштәр органдарында ла ҡабул ителергә тейеш.

Оператив дежур итеүсе һеҙҙең хәбәрҙе иҫәпкә алыу документына теркәй һәм номеры яҙылған талон-белдереү ҡағыҙы бирә. Һеҙ ғариза йәки хәбәр менән эске эштәр органының һәр хеҙмәткәренә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ һәм улар, үҙ сиратында, сара күрергә бурыслы. Рәсәй Федерацияһының енәйәт-процессуаль ҡануниәтенә ярашлы, енәйәт хаҡындағы ғаризаны яҙма йәки телдән бирергә мөмкин. Ғариза йәки телдән мөрәжәғәт иткәндә, күрәләтә ялған хәбәр енәйәти яуаплылыҡҡа алып килә икәнлеген иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

Енәйәт боҙоу хаҡында хәбәр иткәндән һуң өс, ә ҡайһы бер осраҡтарҙа 10 тәүлектән дә (өҫтәмә тикшереүҙәр уҙғарыу талап ителгәндә прокуратура ризалығы менән 30 тәүлеккә тиклем) ҡалмай, эске эштәр органы тарафынан енәйәт эше ҡуҙғатыу йә енәйәт эше ҡуҙғатыуҙы кире ҡағыу, йә эште тикшереү органына йәки судҡа ебәреү хаҡындағы ҡарар ҡабул ителергә тейеш. Ҡарар ҡабул ителгәндән һуң бер тәүлек эсендә мөрәжәғәт итеүсегә яҙма формала, ҡарарға ҡарата яла биреү хоҡуғын һәм тәртибен аңлатып, хәбәр ебәрелә.

Мөрәжәғәт итеүсе эске эштәр органында ҡаралған документтарҙы тултырыу телендә йәки үҙе белгән телдә ғариза биреү, ҡабул ителгән ғаризаға ҡарата ниндәй ҡарар ҡабул ителеүе, уға ҡаршы яла биреү тәртибе аңлатылған белдереү ҡағыҙы алыу, эске эштәр органы етәкселегенә, прокуратура һәм судҡа полиция хеҙмәткәрҙәренең эшмәкәрлегенә ҡарата ялыу биреү хоҡуғына эйә.

Полиция хеҙмәткәрҙәренең закондыҙ эш итеүенә (йәки бер нәмә лә эшләмәүенә), шул иҫәптән енәйәт хаҡындағы ғаризаны ҡабул итеү һәм теркәүгә ҡағылышлы эшмәкәрлегенә ҡарата булған мәғлүмәтте Өфө ҡалаһы, Шәфиев урамы, 46-сы һанлы йортҡа килеп йәки Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса Идаралығының ҡыҙыу линияһына 237-17-77 телефоны буйынса шылтыратып еткерергә була. Шулай уҡ Идаралыҡтың рәсми сайтындағы "граждандар мөрәжәғәте" бүлегендә лә мәғлүмәт ҡалдырырға мөмкин.

**Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса Идаралығының матбуғат хеҙмәте.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Сөйәл



❖ 1 алманы еп менән урталай бүлергә. Уның ике яртыһы менән сөйәлде ышҡырға һәм алманы еп менән кире бәйләп ҡуйырға, ергә күмергә. Алма сереп бөтөү менән сөйәл дә юҡҡа сыға.

❖ Көн һайын һарымһаҡ һуты һөртөргә. Ғәҙәттә, был дауанан һуң сөйәл 10 көндә юҡҡа сыға.

❖ Сей, тоҙланмаған ит киҫәктәре менән сөйәлдәрҙе ышҡырға һәм итте ташларға.

❖ Яңы бешкән балан емешен һытып, уны сөйәлгә лейкопластырь менән йәбештерергә. Алтынсы көнгә сөйәл лейкопластырь йәбешеп сығасаҡ, ә урыны бер көндә бөтәшәсәк.

❖ Сөйәл биттә булһа, 12-20 сәғәткә 60 процентлы салицил майы, өҫтөнән купорослы-майлы мазь һөртөргә. Был осраҡта сөйәл түҙерлек итеп әсетәсәк. Дауа ике аҙна дауам итә. Ҡул бармаҡтарындағы сөйәлдәр ай ярым ваҡыт эсендә дауалана.

❖ Сөйәл үләне (чистотел большой) һутын көнөнә бер тапҡыр сөйәлгә һөртөргә.

❖ 2 ҡалаҡ мелисса үләнен 400 мл һыуҙа төнәтергә һәм ашар алдынан яртышар стаканлап көнөнә 3 тапҡыр эсергә.

❖ Төрлө сөйәлдәрҙе дауалау өсөн төнәтмә: эре кесерткән япрағы (крапива двудомная) - 30 г, репешок үләне - 30 г, ыңырҡбыуын үләне - 30 г, юл япрағы - 25 г, бәпембә тамыры - 25 г, цикорий тамыры- 25 г, артыш - 25 г, ҡайын япрағы - 25 г. Бергә болғатырға. 2 ҡалаҡ үләнде 0,5 литр һыуҙа төнәтергә һәм яртышар стаканлап ашар алдынан көнөнә 4 мәртәбә эсергә.

❖ Ҙур булмаған сөйәлдәрҙе бәпембә һуты менән бөтөрөргә була.

❖ Һуған һуты ла сөйәлдән ярҙам итә.

❖ Быяла һауытты һуған ҡабығы менән тултырып, 9 процентлы һеркә ҡойорға һәм ун көн ҡараңғы урында торорға. Ошо төнәтмәгә марляны тығып алырға һәм төнгөлөккә сөйәлгә лейкопластырь йәбештереп ҡуйырға.

❖ Төнгөлөккә тоҙланған бәшмәк бәйләргә. Бер нисә көндән сөйәл юҡҡа сыға.

❖ Иртән һәм кисен 12 минут дауамында касторка майы менән ышҡырға. Дауаланыу курсы - 5 көн.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМҒӘТ!

**Билдәле собриолог, ғалим-этнограф, Себер федераль университеты профессоры Виктор Павлович Кривоногов "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы саҡырыуы буйынса Башҡортостанға килде. Ул был юлы республиканың төньяҡ райондарында уҡытыусылар, медицина хеҙмәткәрҙәре, муниципаль район хакимиәттәре хеҙмәткәрҙәре, йәмәғәт ойошмалары, дин әһелдәре алдында сығыш яһаны. Собриология фәне халыҡты миллионлап ҡырыусы алкоголизмға ҡаршы яңы ла, яҡшы онотолған иҫке лә көрәш алымын тәҡдим итә. Ул эскелеккә, эскеселәргә ҡаршы түгел, айыҡлыҡ өсөн көрәшеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Сөнки алкоголизмдың трагедияһы - ул эскеселәр түгел, ә айыҡлыҡты инҡар итеп, самалап, "мәҙәни" эсеүселәр. Виктор Павловичтың ошо туралағы сығышы ышандырырлыҡ та, дәлилле лә, уйландырырлыҡ та булды. Уны гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ:**



# САМАЛАП, МӘҘӘНИ ЭСЕҮ...

## эскелеккә ҡарағанда ла ҡурҡынысыраҡ

- 1992 йылдан һуң Рәсәйҙә халыҡ һаны һәләкәтле тиҙлек менән кәмей башланы. Ҡайһы бер йылдарҙа табуттар һаны балалар коляскаларына ҡарағанда бер миллионға күберәк кәрәк булды. Илде һуғыштар, киң мәғлүмәт саралары яр һалған тауыҡ йә суҫҡа кеҙеүе ҡарманы. Улар халыҡтың донъя менән хушлашыуының төп сәбәпсеһе алкоголдән иғтибарҙы ситкә борҙо. Ете диңгеҙ аръяғындағы, беҙгә килеп етер-етмәҫе билдәле булмаған әфәт тураһында тылҡып, үҙ йортобоҙға хужа булған әфәт тураһында онотторорға тырыштылар.

Алкоголь киҙеүе күптәнән Рәсәй эпидемияһына әйләнде. Халыҡты меңләп түгел, миллионлап ҡыра ул. Алкоголь - иң ҡурҡыныс наркотик. Уның эҙемтәләре дәүләт, милләт именлегенә янай. Шуға күрә, эсеү йәки эсмәү кешенең шәхси эше генә булыуҙан туҡтай. Был тәңгәлдә айыҡ сәйәсәт, айыҡ аң ғына заман сиренә ҡаршы көрәшә ала. Егерменсе быуат башында, эскелек артҡас, беренсе булып уҡытыусылар, медицина хеҙмәткәрҙәре, интеллигенция вәкилдәре ошо афәткә ҡаршы сыҡҡан. Ун туғыҙынсы быуат ахырында бөйөк яҙыусы Лев Николаевич Толстой айыҡлыҡ хәрәкәтенең алдынғы идеологтарының һәм лидерҙарының береһе булған. Уның хәрәкәтендә тағы ла ете йөҙләгән интеллигенция вәкиле иҫәпләнгән. Бөгөн был мәсьәләнең хәүефһеҙлек кимәлен аңлаусылар әҙ. Урамда тәгәрәп эсеп йөрөүселәр, эскелек арҡаһында үлеүселәр насар күренеш, ҙур проблема булараҡ ҡабул ителһә лә, уның айышына төшөнөп, сәбәптәрен эҙләргә тырышыусылар юҡ.

Дәүләт алкоголде әҙ етештерһә, эскеселәр кәмей, күп етештерһә, хәмер ҡулланыусылар һаны арта. Нисек итеп эскелек кимәлен билдәләргә була һуң? Иң дөрөҫ күрһәткес - абсолют алкоголдең йән башына тура килгән күләмен иҫәпләү. Эскелек, енәйәтселек, төрлө ауырыуҙар һәм башҡа бик күп зыян күләме ошо күрһәткескә тура пропорциональ. Ул күрһәткес түбән икән, зыян да түбән. Юғары икән - киреһенсә. Бөтә Донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы махсус шкала төҙөгән. Уның буйынса, алкоголде йән башына өс литрға тиклем ҡулланыу - түбән, дүрт-биш литр - уртаса, һигеҙ литр - юғары кимәл. Ҡулланыу һигеҙ литрҙан артһа, милләттең генетик тоҡомо боҙола башлай. Милләт үлә. Бөтә варианттарҙы ныҡлап тикшергәндән һуң ғалимдар дәүләт өсөн иң оптималь һәм берҙән-бер дөрөҫ күрһәткес ноль булырға тейеш тигән ҡаты ҡарарға килгән. Утопиямы? Һис юҡ. Бөгөн донъяның ҡырҡ өс дәүләтендә ошо күрһәткес нолгә тигеҙ. Был - Ислам дәүләттәре. Рәсәйҙә лә, күрһәткес иң юғары булыуға ҡарамаҫтан, аҙ эскән төбәктәр бар. Шул уҡ Ислам дине өҫтөнлөк иткән Кавказ төбәктәре айыҡлыҡ буйынса өлгө була ала. Бер быуат элек башҡорттар менән татарҙар араһында ла эсеүселәр бөтөнләй булмаған. Әммә был ике милләт диненән айырылыу сәбәпле айыҡлыҡты һаҡлап ҡала алмаған.

Эйе, Рәсәйҙә был күрһәткес донъяла иң юғарыһы. Ун һигеҙ литр! Медведев 2009 йылда үҙ сығышында һәләкәтле сиккә етеүебеҙҙе билдәләне. Нимәләр эшләргә кәрәклеге тураһында ла белгертте. Ләкин ул эшләргә тәҡдим иткән иллеләгән яҡшы закон проекттары депутаттар тарафынан ҡабул ителмәне. Кемдәргәләр айыҡ Рәсәй кәрәкмәй. Үкенескә күрә, "коро закон" оҡшамаған кешеләр бөгөн идара дилбегәһен ҡулдарында үҙ ыңғайына бороу көсөнә эйә. Был ҡатлам ошо иҫерткес эсемлектәрҙе етештереүселәр, һатыусылар, һатыуҙан табыш алыусылар, бер һүҙ менән әйткәндә, алкоголь мафияһы. Алкоголь һатыуҙан килгән аҡса - уларҙың көсө. Алкоголь мафияһының ҡулында киң мәғлүмәт саралары, кинематография. Был мафия үҙенең табыш сығанағын аҡлау өсөн аҡса йәлләмәй: спиртлы эсемлек ҡулланыуҙы рекламаған фильмдар төшөрөү, ғалимдарҙың "тикшеренеүҙәрен", депутаттарҙың "коро закон"ға ҡаршы сығышын һатып алыу бер ни тормай уларға. Тап улар алкоголь самалап эскәндә файҙалы һәм "коро закон" суррогаттарҙың күплəп етештерелеүенә булышлыҡ итәсәк, тигән миф менән йәмғиәт башын бутай.

Ләкин халыҡты эскелек һаҙлығында батырырға теләүселәрҙең дошманы ла бар. Нисек кенә гәжәп яңғырамаһын, был - балалар. Ни өсөн тиһегеҙме? Сөнки йыл һайын Рәсәйҙә миллиондан ашыу бала донъяға килә. Улар тыумыштан айыҡ. Ике миллионға яҡын өлкән йәштәге кеше донъя менән хушлаша. Уларҙың күпселеге алкоголь етештереүселәрҙең клиенттары булыуын иҫәпкә алғанда, улар табыштарын юғалта. Донъя үҙ айышы менән шулай барғанда бер нисә тиҫтә йылдан эсеүселәр бөтөнләй ҡалмаясаҡ. Был иһә, алкоголь етештереүселәр өсөн ҙур трагедия. Шуға ла алкоголь мафияһы балалар, үҫмерҙәр, йәштәр нисек тә булһа эсә башлаһын өсөн бар көсөн һала. Донъя менән хушлашҡан клиенттарына алмаш кәрәк бит инде.

Үҫмерҙәрҙе, йәштәрҙе нисек итеп эсергә өйрәтергә? Ошо маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн егерменсе быуаттың 50-се йылдарында махсус фән теорияһы барлыҡҡа килә. Халыҡты иҫертеп, байырға теләүселәр заказы буйынса эшләгән ғалимдар ғилми эштәр яҙа, тикшеренеүҙәр алып бара. Мәскәү, Петербург китапханаларында һаҡланған ошо диссертацияларҙы үҙ күҙҙәрем менән күрмәһәм, мин был хәбәргә ышанмаҫ та инем. Уларҙың теорияһы фәнни нигеҙ алғандан һуң, ааяуһыҙ рәүештә тормошҡа ашырыла башлай. Теорияны рәсми рәүештә, баланы нисек итеп эсергә өйрәтергә, тип атаһаң, халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ көсәйер ине. Шуға ла теорияның йүнәлешен эскелеккә ҡаршы көрәш тигән изге юҫыҡҡа бороп ебәрәләр. Эскелеккә ҡаршы көрәш икән, тимәк, изге көрәш, быһны менән бөтәһе лә килешә. Әммә иң ҡурҡынысы уны тормошҡа ашырыу алымында. Мәҙәни эсергә өйрәтеүгә ҡайтып ҡала был алым. Уның төп маҡсаты: әйҙәгеҙ, бөтә эскеселәрҙе, алкаштарҙы сама белеп, байрамдарҙа ғына мәҙәни эсергә өйрәтәйек! Матур яңғырай ҙа, тик... Был теорияға тиклем иҫәптә торған эскеселәр һаны миллион ярым булһа, уны тормошҡа ашыра башлағас, был иҫәп ун алты миллион ярымға етә. Сере нимәлә һуң? Бер ниндәй ҙә сер юҡ икән. Эскесе дауаланыу курсы үтеп, эскене ташлай икән, киләсәктә уға хәмер эсеү тыйыла. Эстеме, элекке ғәҙәтенә кире ҡайтасаҡ. Ул бер ҡасан да сама белеп, мәҙәни эсә алмай. Шуға ла хроник эскесенең ике юлы бар: йә ул эсеп, эт һымаҡ урамда тәгәрәп үлә, йә алкоголде башҡа бер ҡасан да ауыҙына алмай. Тимәк, бындай эскеселәргә ҡаршы үрҙәге теория менән көрәшеп булмай.

Ә кемгә ҡаршы йүнәтелгән һуң ул саҡта был теория һәм эскелеккә ҡаршы көрәш? Балаларға ҡаршы була инде. Улар донъяға айыҡ булып тыуа. Бөгөнгө көнгә тиклем бер ҡулына һыра шешәһе, икенсеһенә тәмәке тотҡан бала тыуғаны юҡ әле. Ҡағиҙә булараҡ, беренсе синыфҡа уҡырға килгәндә лә бала бер йотом да алкоголь тәмләмәгән була. Ә мәктәпте тамамлағанда иһә... Красноярск крайында үткәргән социологик тикшеренеүҙәрҙә ярашлы, бер процент мәктәп уҡыусыһы ғына спиртлы эсемлектәрҙе тәмләп ҡарамаған булып сыға. Был күрһәткес бөтә Рәсәйгә хас, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы.

Ни өсөн балалар эсә башлай? Берәйһенең башында, мин алкоголик булам, тигән уй буламы? Юҡ, бер кем дә, алкоголик булам, тип эсә башламай. Эсеүгә арҡаһында юҡҡа сыҡҡан кеше лә, эскесе булам, тип эсә башламаған. Ул байрамдарҙа, самаһын белеп, мәҙәни эсә башлаған. Бала сағында мәҙәни эсеүгә уны үҙенең ата-әсәһе үк өйрәткән, тәүге рюмканы һонған. Шулай итеп, дәүләт тарафынан пропагандаланған эскелеккә ҡаршы көрәш, ысынында иһә, балаларҙы алкоголгә ылыҡтырыуға йүнәлтелгән сара. Ул эскеселәрҙе айыҡтыра алмай. Әммә бала айыҡлығын тамыры менән юҡҡа сығара. Эсмәгән балаларҙың аңына сама белеп эсеү теорияһы һеңдерелә. Балалар шулай эсә башлай, берәүҙәре - бишенсе синыфта, икенселәре - унынсыла. Эсереүселәр өсөн иң мөһиме - баланың беренсе рюмкаһы күтәреүе. Ҡалғаны үҙе китәсәк. Самалап эсә башлаусыларҙың бер өлөшө бер-нисә йылдан алкашҡа әйләнәсәк.

Ата-әсә, туғандар, дуҫтар ҙа баяғы теорияны тормошҡа ашырыусыға әйләнә. Бала саҡта ата-әсә үҙе эсә-эсә балаһына шулай тип тылҡый: әле һинә эсергә иртә, үҫкәс, самалап ҡына эсерһең, тик ныҡ эсергә ярамай, алкашҡа әйләнерһең. Йәғни бала аңына ике юл барлығы тураһында һеңдерелә: йә ул самалап, байрамдарҙа ғына эсә, йә алкашҡа әйләнә. Бала бит ахмаҡ түгел. Уның эсеп урамда тәгәрәп ятҡыһы килмәй. Шуға ла ул мәҙәни эсеүҙе һайлай.

Шуға ла беҙ, эскелеккә ҡаршы түгел, айыҡлыҡ өсөн көрәшергә кәрәк, тип оран һалабыҙ. Эскелектең эҙемтәләре менән көрәшеү файҙа бирмәйәсәк. Бер кешене дауаланың, ти. Әммә уның урынына яңы эскеселәр өҫтәләсәк. Самалап, мәҙәни эсеү алкоголизмға ҡарағанда менәр тапҡырға ҡурҡынысыраҡ. Кем үҙенең иҫерткес эсемлек эсеүен, байрамдарҙа, сама менән, мәҙәни эсәм, тип аҡлай, ул йәмғиәткә ҡаршы ҙур енәйәт эшләй.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Профессорҙың ике районда халыҡ менән осрашыуҙарында ҡатнашырға тура килде беҙгә лә. Беренсе районда осрашыу бик тыныс, матур үтте. Йыйылған халыҡ лекторҙың һүҙен йотоп ултырып, проблемаға битараф булмауын күрһәтте. Мәҙәни эсеү тураһындағы мәғлүмәт уларға ысынлап та яңылыҡ һымаҡ тәьсир итте. Ялған теорияға алданып, самалап эсеү менән булыуҙары, был мәғлүмәттең уларҙы уйландырыуы тураһында әйтеүсе кешеләр ҙә булды. Тимәк, профессорҙың сығышы файҙаға булды был районда.**

**Икенсе районда осрашыуға килгән халыҡ үҙен башҡасараҡ тотто. Лекция башланыу менән үк урта йәштәрҙәге бер ағай үҙенең аҡылын күрһәтмәксе булыпмы, ғалимдың һүҙҙәренә ҡаршы килеп маташты. "Беҙ һеҙ һөйләгәндең барыһын да беләбеҙ, көрәшеү юлдарын әйтегеҙ", тип, түҙемһеҙлек күрһәтте. Тора-бара уға башҡа тауыштар ҙа ҡушылды. Самаһын белеп эсергә ярай, тип тылҡыны бер нисә ҡатын-ҡыҙ. Лекторҙың: "Эскелектән бөтөнләй баш тартҡанда ғына "йәшел йылан"ды еңеп, айыҡ йәмғиәт төҙөп була", тигән һүҙҙәренән һуң урта йәштәрҙәге бер ҡатын аяғүрә баҫты ла: "Эстек, эсәбеҙ һәм эсәсәкбеҙ", - тип ғорур белдерҙе һәм ишеккә табан йүнәлде. Уға тағы ла унлап кеше эйәрҙе. Аҙаҡ әйтеүҙәренсә, залдан ҡысҡырып, лекторҙы алборға-тып ултырған ағай райондың бер мәктәбенең директоры, ә "Эстек, эсәбеҙ һәм эсәсәкбеҙ", тип ғорурланған апай биология уҡытыусыһы икән...**

**Уҡытыусыларҙың уҡытыусылары ошолай ҡыланғанда ниндәй айыҡлыҡ тураһында һөйләргә була, тип уйларға булыр ине. Ләкин ниндәй уҡытыусылар ҡаршы сыҡты һуң? Урта быуын, илле йәштәр тирәһендәгеләр. Улар ошо ялған теорияларҙан иң ныҡ зыян күргән быуын бит. Ә залда ултырыусы йәштәрҙең береһе лә уларға ҡушылманы. Улар тәкәбберләнеп, айыҡлыҡҡа протест та күрһәтмәне, ҡайһы берәүҙәр кеүек, беҙ генә ни эшләй алабыҙ, тип күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелмәне. Тимәк, улар эскелектең насар икәнен белә, киләсәктә барыбер ҙә оло быуын хатаһын ҡабатламаясаҡ, донъяға асыҡ күҙҙәр менән бағасаҡ, тип ышанғы килә. Профессор Кривоногов менән осрашыуҙы ойоштурған район хәкимиәтендә эшләгән Айнур исемле егет үҙе айыҡ тормош алып бара. "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте активисы. Ғөмүмән, "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте башында тороусыларҙың барыһы ла йәштәр. Милләттәштәребеҙ араһында сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыусылар, дин юлына баҫыусылар ҙа - шулай уҡ йәштәр. Тимәк, беҙ тулы ышаныс менән, бер көн килеп йәмғиәтебеҙ эскелектән арынасаҡ, тип әйтә алабыҙ. Беҙҙең милләт яйлап айыға, таҙарына бара. Быға Себерҙән килгән ғалим да инанған: "Был район аудиторияһында башҡорттар булманы, ахры..." тип һығымта яһап ҡуйҙы аҙаҡтан...**

Азамат ӘБУТАЛИПОВ.

ХӘТЕРКИТАП

# БӨРКӨТТӘР ОЯ ТАШЛАМАЙ...



**Ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев тураһында һүҙ сыҡҡанда, күңелгә тап ошо юлдар килә. Бәлки, был уның Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фашист илбаҫарҙары өҫтөнә сая бөркөттәй ташланыуына бәйлелер. Бәлки, Мәскәүҙә йәшәп ятҡан еренән тыуған Башҡортостанына ҡайтып, хеҙмәт юлын тыуған ерендә дауам итеүе сәбәпселер...**

Муса Ғайса улы Гәрәев 1922 йылдың 9 июлендә Илеш районының Иләкшиҙе ауылында донъяға килә. Бала сағында ауыл өҫтөнән осоп үткән беренсе яраплан башланғыс синыфты тамамлаған малайҙың күңелен ныҡ елкендерә. Бәлки, осоусы булыу теләге уның күңеленә шул мәлдәрҙә үк һалынып, уның яҙмышына әүерелгәндер, тип тә уйланыла. Сөнки тимер юл техникумында уҡып йөрөгән егет 1940 йылда Ҡыҙыл Армия сафына саҡырылғас, Энгельс исемендәге хәрби авиация мәктәбендә белем алырға ҡарар итә. Нисек кенә булмаһын, Муса Гәрәевтың яҙмышы ғүмерлеккә зәңгәр күк, һауа юлы, бөркөттәр генә осор бейеклектәр менән бәйләнгән.

Хәрби юлын ул ябай осоусы булып башлай. 1944 йылда иһә эскадрилья командиры дәрәжәһенә етә. Бөйөк Еңеүҙә майор, полк штурманы булып ҡаршылай. Сталинград, Донбасс, Ҡырым, Белоруссия, Литва, Польша, Көнсығыш Пруссия өсөн алыштарҙа ҡатнаша. 1944 йылдың августа уның иҫәбендә 164 хәрби осош теркәлә, шуның өсөн дә Муса Ғайса улы СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 23 февралендәге указы менән Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. 1945 йылдың мартында иһә хәрби осоштар һаны 207-гә етә. СССР Юғары Советы Президиумы был юлы уға икенсе тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеме бирелеү тураһында указ ҡабул итә. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда М.Ғ. Гәрәев барлығы 250 хәрби осош яһай. 1945 йылдың 24 июнендә Мәскәүҙәге Еңеү парадында ҡатнаша.

Һуғыштан һуң ҡаһарман осоусы-штурмовик авиация полкы менән командалыҡ итә. 1951 йылда - М.В Фрунзе исемендәге Хәрби академия, 1959 йылда Генераль штабтың Хәрби академияһын тамамлай. Полковник дәрәжәһендә 1964 йылда запасҡа сыҡҡас, 12 йыл Башҡортостан Республикаһының ДОСААФ комитеты рәйесе булып эшләй. 1987 йылдың 17 сентябрендә баш ҡалала вафат була, Еңеү паркында ерләнә.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Суфиян ПОВАРИСОВ, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:** Муса Гәрәев менән миңә күп тапҡырҙар осрашырға тура килде. Бер ваҡыт Илештә Башҡортостан Яҙыусылар союзы тарафынан әҙәби лекторий ойошторолғайны. Шул райондан булғанлыҡтан, мине делегацияның етәксеһе итеп ҡуйҙылар. Беҙҙең менән бер нисә китап авторы Муса Гәрәев тә бар ине. Илеш ҡунаҡханаһында уның менән бер бүлмәлә урынлаштыҡ. Шунда ғына ла уның әллә күпме шыңғай сифаттарын күреп шатландым. Теүәллек, сабырлыҡ, иплелек... Кис ятырға әҙерләнгәс, салбарындағы һырҙың боҙолоуын күреп борсолдо ул. Нисек итһә итте, үтек табып, салбарын үтекләп алды. Шунан уның һырына ҡарап һоҡландым. Ҡулды киҫерлек ҡылыстай булған, йәнәһе. Беҙҙең салбар ваҡыт-ваҡыт күрек кеүек булып бөтә. Бигерәк тә юлда йөрөгәндә. Ә бына Муса Гәрәевтың хәрбиҙәрсә бөхтәлек ятатыуы айырылғыһыҙ йәҙәтенә әүерелгәйне. Кешенең эсе лә, тышы ла матур булырға тейеш, тигән һүҙҙәрҙе тап уға ҡарап әйтергә була ине.

Халыҡ менән осрашыу мәҙәниәт йортонаң ҙур залында булды. Муса Гәрәевкә ярты сәғәт ваҡыт бирҙеләр. Ул ҡағыҙға ҡарамай һөйләне. Һөйләмә мәғәнәле, логик эҙмә-эҙлекле, сәнғәтле булды. Шуныһы ғәжәп: бер генә тапҡыр сәғәтенә ҡарамаһа ла, һүҙен ул нәҡ утыҙ минутта теүәлләне. Иртән оҙаҡ итеп күнекмә яһауы, сама менән ашай белеүе, кешеләргә ҡарата булған яҡшы мөнәсәбәте, үҙен һәр саҡ ябай тотоуы, ваҡыт-ваҡыт матур итеп йылмайыуында оялсанлыҡ сатҡыларының һирпелеп китеүе - тағы ла күп төрлө шыңғай сифаттары уны ысын кеше итеп күрһәтә ине. Әлбиттә, уның тураһында роман яҙған кеше булараҡ, мин оҙон-оҙаҡ итеп һөйләй алыр инем. Ләкин, форсаттан файҙаланып, күңелемә тынғылыҡ бирмәгән бер һорауҙы йәмәғәтселеккә сығарғым килә: бынан бер йыл элек "Өфө" аэропортына Муса Гәрәев исемен биреү тураһындағы һүҙҙәр ишетелеп ҡалды ла, тынды. Бәлки, батырҙың тыуыуына 90 йыл тулған көндәрҙә был мәсьәлә хәл ителер? Һәр хәлдә, мин шуға өмөтләнәм.

**Рудоль ӘҮСӘХОВ, архитектор:** Ҡайһы саҡта Илеш районы талантҡарға ярлы тигән фекер әйтеп ҡуялар. Шуға яуап итеп мин, Илештә батыр кешеләр йәшәй, тип әйтер инем. Батырҙар игенсе булараҡ та, донъя көтөү йәһәтенән дә, тыныс тормошта ла үҙҙәрен элек-электән күрһәтә киләләр. Үҙенсәлекле халыҡ йәшәй Илештә. Улар араһында иң батыры, иң күренеклеһе - Муса Ғайса улы Гәрәев. Уны миңә иҫән ваҡытында күрергә насип булды. Дуҫ булып йәшәнек, тип маҡтана алмайым, сөнки ул беҙҙән күпкә олораҡ, бик абруйлы кеше ине. Уның тураһында әйткәндә, уға иң тап килгән ҡылыҡһырлау - ул бик ябай булды. Бер ваҡытты ла, мин герой, тип үҙен башҡаларҙан өҫтөн ҡуйманы, юғары тотманы, һәр ваҡыт, ниндәй генә хәл-торош булмаһын, ябайлығын һаҡлап ҡала алды. Был да, минеңсә, үҙенә күрә ҙур батырлыҡтыр ул.

Тағы бер фекер. Уйлап ҡараһаң, Шакирйән Мөхәмәтйәнов, Миңлегәле Ғәбәйҙуллиндарға һәйкәл бар, ә ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы булған Муса Гәрәевкә бер ҡайҙа ла һәйкәл ҡуйылмаған. Эйе, бюстары, таҡтаташтар, музейҙар һ.б. бар, ләкин бит һәйкәл ул бөтөнләй башҡа иғтибар билдәһе, башҡа мөнәсәбәт. Әллә Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандар ғына былдай иғтибарға лайыҡ булып, уларҙың ҡәҙере нығыраҡ буламы икән? Ниндәй генә герой булып та, һуғыштан тере ҡайтыу ундай мөнәсәбәткә лайыҡ түгелме икән? Минеңсә, Муса Гәрәев та уларҙан кәмерәк батырлыҡ күрһәтмәгән, уның батырлығы ла илгә ҙур файҙа килтергән һәм был мәсьәлә республика кимәлендә хәл ителергә тейешле эш, тип уйлайым.

**Фәрит ВАХИТОВ, Республика Хәрби дан музейының ғилми хеҙмәткәре:** Герой менән беренсе осрашыуым Өфөнөң Дан бульварындағы уның бюсы эргәһендә булды. Уҙған быуаттың 60-сы йылдары һуңы ине. Муса Ғайса улы ул ваҡыттағы Оборона йорто эргәһендә машинаһын туҡтатып, бюст алдына килеп, уйға сумды. Журналист ғәҙәте буйынса: "Һәр көн үҙегеҙҙең бюсығыҙҙы күрәһегеҙ. Шул саҡта ниндәй тойғолар кисерәһегеҙ?" - тип һорамай түҙмәнем. Бәлки, был минең яҡтан тыйнаҡһыҙлыҡ та булғандыр, әммә ул миңә яғымлы ҡарашын төбәп, саҡ ҡына йылмайҙы ла: "Үҙең нисек уйлайһың? - тине һәм бер аҙ тын торғандан һуң, дауам итте. - Әлбиттә, ауыр. Тере саҡта бюст ҡуйылыуы тәбиғи түгел. Уға ҡарамай үтергә тырышам".

Ошо осрашыуҙан һуң ул минең эшмәкәрлегем менән даими ҡыҙыҡһынып торҙо. Ә мин уның йәштәр, уҡыусылар, хеҙмәт коллективтары менән осрашыуына эләгергә тырыша инем. Ул телгә бай булманы, әммә ябай, һәр нәмәне аңлап, башҡалар аңларлыҡ итеп һөйләй белде. Уны тын да алмай тыңлайҙар ине.

Республика 80 йыллыҡ юбилейына әҙерләнгәндә уның тураһында яҙырға тура килде һәм хәләл ефете Галина Александровна менән оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул осоусы Гәрәевтың һуғышта бер генә йәрәхәт тә алмауын белдерепː "Уны минең мөхәббәтем һаҡланы", - тип шаяртып ҡуйҙы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# МИЛЛИ РИЗЫҠТАРЫБЫҘ

Малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтарҙа малды үрсетеүгә йүнәлтелгән ритуалда ыуыҙ символик роль уйнай. Һыйыр бызаулағас, ыуыҙҙан аҙыҡ-түлек бешереп, күрше-тирәне һәм туғандарҙы һыйлайҙар, ыуыҙҙың бер өлөшөн быҙауға эсерәләр, сөнки унда бик күп файҙалы матдәләр бар.

Күсмә һәм ярымкүсмә халыҡтарҙың көнкүрешендә ит аҙыҡтары ҙур урын биләй. Бында тәүге урында ҡоротло һурпа, ҡаҡланған ҡаҙылыҡ, ас эсәктән эшләнгән йүрмә, тултырма тора. Барлыҡ күсмә һәм ярымкүсмә халыҡтарға итте ҡаҡлау, киптереү, ыҫлау, тоҙлау, туңдырыу ысулдары билдәле була.

Малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтарҙа ҡунаҡты бешкән ит менән һыйлауҙың үҙ тәртибе һаҡлана. Иң ҡиммәтлеһе тип йылҡы һәм ҡуй ите һанала. Һарыҡ башы менән бер урында башҡорттар аҡһаҡалдарҙы, муллаларҙы ғына һыйлаған, ә икенселәре иһә иҫкә алыу табылдарында башҡа төр иткә ҡушып бешергәндәр. Башҡорттарҙа иртә яҙын ҡунаҡтарҙы "баш итенә саҡырыу" йолаһы булған. Шулай уҡ арт һан ите лә абруйлы һаналған. Оса һөйәге менән ирҙәрҙе лә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла һыйлағандар. Ҡабырға һөйәге итен абруйлы ҡунаҡтарға биргәндәр. Шулай уҡ ҡунаҡ һыйлауҙа түш ите лә айырым урын алып тора, уны йомғиәттең абруйлы ағзалары, баш ҡоҙалар, батырҙар өсөн әҙерләгәндәр. Ҡалаҡ һөйәге ите лә ҡунаҡ ашы тип һаналған. Янбаш ите лә юғары баһаланған. Ярымкүсмә тормош алып барыусы халыҡтарҙа, иген һәм он етерлек күләмдә булмағанда, бешкән һәм туралған итте бешкән дүрт мөйөшлә һалма йәки сумар менән биргәндәр. Артабан ул традицияға әйләнгән һәм бишбармаҡ тип атала. Ҡайһы бер ваҡыт ҡайнап торған һурпаға ҙур киҫәкле ҡамыр төшөргәндәр һәм был аш күмәс ашы тип аталған.

Башҡорттар шулай уҡ борондан иген культуралары менән тукланған. Әлбиттә, тәүге осорҙа ярмалар, он һәм ҡамыр аштары традицион аҙыҡ-түлек мәҙәниәтенең бер өлөшөн генә алып торған. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорттар бик иртә тары ҡуллана башлаған. Башҡорттарҙың төп ҡатламы игенде ҡыҙҙырып (ҡурмас) һәм тарттырылған килеш талҡан, буҙа, бутҡа, өйрә, аш һ.б. рәүештә ҡулланған.Ҡамыр аштарының эволюцияны бер нисә йүнәлештә бара һәм бешереү ысулдары ла төрлө була: көлсә (көлгә күмеп бешерелгән йәймә), йәймә, йөҡа, бауырһаҡ (ҡоро ҡаҙанда йәки майҙа), мейес төбөндә бешкән икмәк, йәймәләр (йәйге мейес төбөндә бешерелә), әсетке менән бешерелгән икмәк, сөсө икмәк, эслек менән бешерелгән бәлештәр (мейестә); ҡамыр составы ла төрләсә була: сөсө - тәмләткестәр һалып баҫылған һәм әсетелгән ҡамыр; технологиялар ҙа төрлө: йәйелгән ҡамыр (тукмас), эслек һалынған йәйелгән ҡамыр (бәлештәр, эремсек билмәне, билмәндәр һ.б.).

XIX быуат һуңынан башҡорттарҙың көнкүрешендә ер эшкәртеүсе халыҡтарға хас аҙыҡ-түлек ҡулланыла башлай. Иген һәм йәшелсә культуралары сәсеү майҙаны артыуы башҡорттарҙың тукланыу ассортиментында тап ошо төр аҙыҡ-түлектең кинәйеүенә килтерә. Был төр аҙыҡтарҙың бер өлөшө төньяҡ, көнбайыш, көньяҡ-көнбайыш һәм үҙәк районда, бигерәк тә ҡатнаш ауылдарҙа, шулай уҡ ҡала һәм завод ҡасабалары эргәһендә йәшәүсе башҡорттарҙың тукланыуында һиҙелерлек урын алып тора. Яңылыҡтарҙың таралыуында ҡатнаш никахтар ҙа ҙур ролен уйнай. Ҡайһы бер боронғо аҙыҡтар (буктаклар, ҡоймаҡтар, белендәр һ.б.) ошо этапта ғөрөф-ғәҙәт әһәмиәтен ала.

Яңы ҡатламда иртә традицияға сәй эсеүҙе индерергә мөмкин. Бик күп ҡамыр аштары (ҡомалаҡ икмәге, сөсө ҡамыр, төрлө печеньелар, эслек һалып бешерелгән төрлө ҡатмарлы бәлештәр) мейестәр барлыҡҡа килгәс киң тарала. Әммә элекке технологиялар тәьҫирендә башҡорттар ҡамыр аштарын әҙерләгәндә уларға әсегән һөт, һары май, мал майы, һөҙлөк ҡушҡан. Ер эшкәртеүсе халыҡтың йоғонтоһо һөт ризыҡтары кухняһында ла сағылыш тапҡан, мәҫәлән, эремсек продукттары ҡамыр аштарына эслек булып хеҙмәт иткән һ.б. Ауылдарҙа сепараторҙарҙың күренеүе һөттән шунда уҡ ҡаймаҡ айыртыу мөмкинлеген биргән.

Башҡортостандың ҡайһы бер көнбайыш һәм көньяҡ-көнсығыш районларында байрам һыйы итеп нәҙек итеп ҡарҡылған тукмаслы аш; ҡыҫтыбый, вареники, билмән, шулай уҡ былау бирәләр. Хужабикәләр тауыҡ тултырыу рецебын да өйрәнә, ҡатмарлы бәлештәрҙең ассортиментын киңәйтә (гөбәҙиә).

Тулыһынса ултыраҡ тормошҡа күскәс, башҡорттар күпләп йорт ҡоштары аҫырай башлай, аҙыҡ-түлек ассортименты киңәйә. Баҡса культуралары барлыҡҡа килгәс, башҡорт халҡының тукланыу традициялары тағы ла байый.

XX быуатта ҡала мәҙәниәте һәм йәмәғәт тукланыуы системаһы йоғонтоһо аҫтында башҡорттарҙың тукланыу системаһы ла үҙгәрә, традицион меню ға магазин продукттары, әҙер ярымфабрикаттар үтеп инә.

**Э. МИҺРАНОВА.**

**(Башы 27-се һанда).**

***✓ Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең хушлашыу хатында республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың киләсәгенә күҙаллау яһай. Әммә республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың хәҙерге хәле уның күҙаллауҙарына тура киләме һуң?***



**2010 йылда башҡорт халҡының данлыҡлы улы, күренекле дәүләт эшмәкәре, мәшһүр тарихсы, атаҡлы ғалим Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Әхмәтзәки Вәлиди" тигән фотоальбом донъя күргәйне. Әйтергә кәрәк, был китап Рәсәйҙә һәм төрки донъяһында ғына түгел, бар донъя кимәлендә киң танылыу яуланы. Китапты төҙөүселәр һәм сығарыусылар - Ғәлим Хисамов, Тәлғәт Сәғитов, Ғәлиә Ғәлимова, Юрий Илингин (рәссам) Халыҡ-ара төрки халыҡтары "Төрксой"ойошмаһының хаҡлы премияһына лайыҡ булды. Яҙыусы Ғәлим ХИСАМОВ менән ветеран нәшерсе Ғәлиә ҒӘЛИМОВАның әңгәмәһендә һүҙ китап һәм уның геройы Әхмәтзәки Вәлиди Туған хаҡында бара.**







# ВӘЛИДИ

## беҙ Вәлидиҙе

**▶ Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап Әхмәтзәки Вәлиди тураһында бик күп китаптар донъя күрҙе. Ике тиҫтә йыл эсендә ғалимдың үҙенең хеҙмәттәре лә башҡорт һәм урыҫ телдәрендә баҫылып сыҡты. Ул баҫмаларҙың барыһынан айырмалы рәүештә был фотоальбомдың үҙенсәлеге нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

**Ғ. ҒӘЛИМОВА:** 2010 йылда уҙған III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына беҙ Вәлидиҙең "Башҡорттар тарихы"н урыҫ телендә баҫтырып сығарҙыҡ. Китап 1995 йылда ҡыҫҡараҡ вариант менән донъя күргәйне, аҙаҡ 2005 йылда был хеҙмәт тулы вариантында баҫылды. Ғөмүмән, әле булһа, XXI быуат башында ла, Әхмәтзәки Вәлидигә төрлөсә ҡараш йәшәй. Әлеге фотоальбомды эшләргә тотонғас, ҡабаланмаҫҡа ла кәңәш биреүселәр булды. Нисек инде, үҙ иленә бөтөнләйгә ҡайтҡан изге затыбыҙҙы беҙ лайыҡлы рәүештә күтәрә алмайбыҙмы ни, тинем мин уларға. Быға тиклем Вәлиди тыуған иленә, милләтенә төрлө китаптары аша әйләнеп ҡайтты. Ә фотоальбомда ул йәнле кеше булараҡ һынланыш ала. Миңә, нәшерсе булараҡ, китаптың төп авторҙары Ғәлим Хисамовтың, Тәлғәт Сәғитовтың, Әмир Юлдашбаевтың был эшкә оло яуаплылыҡ менән тотоноуына шаһит булырға тура килде. Китаптың төҙөлөш, тупланыш мәсьәләләрен Ғәлим Афзал улы үҙ өҫтөнә алды һәм был бурысын бик камил рәүештә атҡарып сыҡты. Рәссамыбыҙ Юрий Илингин та китапты биҙәү эшенә механик рәүештә тотонманы, иң тәүҙә Вәлидиҙең кем булыуы хаҡындағы материалдар менән танышып сыҡты. Һөҙөмтәлә хеҙмәтебеҙ "Төрксой"ҙың 14 иле араһында танылыу яуланы. Рәсәй Китап нәшриәттәре ассоциацияһы (АСКИ) нәшерселәре араһында мемуар-биографик һәм тарихи-документаль характерҙағы иң яҡшы баҫма тигән "Заман бәйләнеше" номинацияһында Рәсәйҙең йөҙәрләгән нәшриәттәре араһында еңеп сыҡты. Был китапта Әхмәтзәки Вәлиди ҙур ғалим, оло сәйәсмән, шул уҡ ваҡытта ябай кеше булып та күҙ алдына баҫа. Ҡыҙы Иҫәнбикәнең хәтерләүҙәре буйынса, Вәлиди беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ кеүек көндәлек мәшәҡәттәр менән йәшәүсе ябай кеше лә. Китаптың тәүге өлөшө Вәлидиҙең сәйәсмән булараҡ эшмәкәрлегенә бағышланһа, артабанғы ҙур өлөшө уның ғалимлығы хаҡында һөйләй. Ул 27 йәшендә Башҡорт автономияһын иғлан итә, Башҡорт хөкүмәтен һәм ғәскәрен төҙөй. Әммә, үкенескә ҡаршы, уның барлыҡ теләк-маҡсаттары тормошҡа ашып бөтмәй. Ә бөгөн XXI быуат башында беҙҙең егеттәр ул турала нимә уйлай икән? Вәлиди һымаҡтар бармы һуң беҙҙең арала?

**Ғ. ХИСАМОВ:** Әлбиттә, Әхмәтзәки Вәлидигә торошло бер нәмә лә эшләп булмайҙыр ул, ләкин беҙ был китапта өлөшләтә булһа ла уны күрһәтергә тырыштыҡ. Вәлиди үҙенең китаптарында донъяға ҡарашын үҙе сағылдыра, ә бында беҙ донъяның уға ҡарашын бирергә тырыштыҡ. Китаптың Вәлидигә бәйле башҡа китаптарҙан төп айырмаһы ошонда ята. Әле Ғәлиә Ғәли ҡыҙы әйткәнсә, башҡорт егеттәренең Вәлидигә ҡарашы менән Вәлидиҙең башҡорттарға ҡарашы бермә-бер тап килә. Был бик мөһим мәсьәлә. Мин бында власть структураларын, ҡыҙылдар-аҡтар яғын алмайым, мин бында бары халыҡты ғына күҙ уңында тотам. Ике яҡлы ҡараштарҙың тап килеүе ике субстанцияның да бөйөк икәнен күрһәтә. Шулай булғас, беҙҙә кәмһенеү тойғоһо бөтөнләй булырға тейеш түгел. Быға Әхмәтзәки Вәлиди юл ҡуймай. Китап өҫтөндә эшләгәндә беҙ ошо хәҡиҡәтте аңлап эш иттек. Әхмәтзәки Вәлидиҙең илде ойоштороусы сәйәсмән, ғалим, ир, атай булараҡ шәхесенә, һәммәһенә-һәммәһенә ҡарашыбыҙ ошо китапта сағылды. Беҙ уны нисек итеп бирә алғанбыҙ, быныһын инде үҙебеҙ әйтә алмайбыҙ. Китапҡа уҡыусы баһа бирә. Әлегә ике баһа бар. Береһе - бөтә Рәсәй нәшриәттәре араһында, бик күп китаптар араһында беренсе урынды алыуы, икенсеһе - 14 илде берләштереүсе "Төрксой"ҙың баһаһы. Китаптың геройҙары, улар бер Вәлиди генә түгел, уның арҡадаштары, башҡорттар, төрөктәр, Ҡырым татарҙары һәм башҡа барыһы ла ошондағы баһаға һыя.

Төрки халҡы ер йөҙөндәге бик боронғо халыҡтарҙың береһе. Һәм әгәр ҙә хәҙерге заманда башҡорттар үҙ туған телендә һөйләшеп ултыра икән, беҙ бик боронғо милләттәрҙең береһе. Мин был фекергә яңыраҡ тағы ла бер мәртәбә ҡайтып инандым. "Урал батыр" эпосында сағылған ер-һыу атамаларына ғына иғтибар итәйек. Саҡ ҡына был китаптан тайпылып, бер генә миҫал килтереп үтәйек. Мәҫәлән, боронғо "Урал" йырында "Күгәрептәй ятҡан, ай, Уралым..." тигән һүҙҙәр бар. Ни өсөн күгәреп ята һуң ул Урал? Ни өсөн зәңгәрләнеп йә алһыланып ятмай? Баҡһаң, бик ябай ғына: тик Уралтау ғына аяҙ көндә күгәреп күренә икән. Йә булмаһа, Шүлгән мәмерйәһендәге һүрәттәр менән Франциялағы шундай уҡ мәмерйәләге һүрәттәрҙең тап килеүен генә алайыҡ. Ә бит Шүлгән мәмерйәһендәге һүрәттәрҙең Францияныҡынан айырмалы рәүештә сюжетлы булыуы күп нәмә тураһында һөйләй. Ул сюжеттар "Аҡбуҙат" эпосындағы сюжетҡа тап килә. Әйтәйек, эпоста Аҡбуҙат бер өйөр мал эйәртеп күлдән сыға һәм кире күлгә төшә. Былар барыһы ла мәмерйә һүрәттәрендә бар. Тимәк, ошо дәлил генә "Аҡбуҙат" эпосының 14 мең йыл элек яҙылыуы хаҡында һөйләй. Бына шундай боронғо заманда яҙылған әҫәрҙәрен үҙенең ерендәге мәмерйә һүрәттәрендә, үҙенең телендә һаҡлаған халыҡ, әлбиттә, ошондай мәшһүр Әхмәтзәки Вәлидиҙе тыуҙыра ала. Ошондай ҡанатландырғыс уйҙар һалынды ла инде китапҡа. Китап башҡаларынан ошо сифаты менән айырыла.



**▶ Китап сығарыуҙың техник һәм башҡа төрлө мөмкинлектәре бик үҫешкән заманда был китаптың еңеп сығыуының төп сәбәбе Әхмәтзәки Вәлиди шәхесенә бәйлелер, тип уйламайһығыҙмы? Әгәр ҙә һеҙ ошондай уҡ полиграфия мөмкинлеге менән башҡа шәхес тураһында китап сығарһағыҙ, ошондай уҡ уңышҡа өлгәшер инегеҙме?**

**Ғ. ҒӘЛИМОВА:** Хәҙерге заман сәйәсәте теләйме-юҡмы, Рәсәй федерализмына нигеҙ ташы һалыусыларҙың береһе Әхмәтзәки Вәлиди шәхесен танырға мәжбүр. Китаптың еңеүе лә шуның бер күрһәткесе. Бынан тыш, китаптың дүрт телдә: башҡортса, төрөксә, урыҫса, инглизсә мәғлүмәт биреүе лә иҫәпкә алынғандыр, тип уйлайым. Китапта Вәлиди тураһында мәғлүмәттең күп бирелеүен дә әйтеп үтергә кәрәк. Ғөмүмән, беҙ, нәшерселәр, алға китап килеп ятһа, нәшер итергә тырышабыҙ инде, шуға күрә, ҡабатлап әйтәм, китаптың уңышы уның төп ойоштороусылары Әмир Юлдашбаев, Ғәлим Хисамов менән Тәлғәт Сәғитовҡа бәйле. Китаптың тышлығына Вәлидиҙең фотоһын һайлаған ваҡытта беҙҙең алда меңәрләгән фотоһүрәт булды. Шуларҙың араһынан беҙ Вәлидиҙең ҡараштары тере килеш һаҡланған, уҡыусы күңеленә үтәнән-үтә ҡараған ошо фотоһүрәтендә туҡталдыҡ. Фотоны Башҡортостан картаһының уртаһына урынлаштырыу ҙа урынлы булды, тип уйлайбыҙ.

Беҙ әле Вәлиди буйынса аҙ эшләйбеҙ. Киләсәктә уның тағы ла камилыраҡ фотоальбомдары, китаптарын күрергә яҙһын.

Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең хушлашыу хатында республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың киләсәгенә күҙаллау яһай. Әммә республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың хәҙерге хәле уның күҙаллауҙарына тура киләме һуң? Минеңсә, халҡыбыҙҙың хәҙерге хәле менән Вәлиди бик үк риза булмаҫ ине. Китапты ҡулға алғанда беҙ ошолар хаҡында ла уйларға бурыслыбыҙ...

**Ғ. ХИСАМОВ:** Китап төп геройы Әхмәтзәки Вәлиди булғаны өсөн генә еңеп сыҡты, тигән фекер бик үк дөрөҫ булмаҫ. Сөнки конкурсҡа йомғаҡ яһаусылар, һығымта эшләүселәр һәр китаптың кем йә нимә тураһында икәнлегенән сығып баһа бирмәне. Ғөмүмән, Рәсәйҙә Әхмәтзәки Вәлидиҙе белмәйҙәр һәм белергә лә теләмәйҙәр. Был - хәҡиҡәт. Яңыраҡ "Киске Өфө"нөң 24-се һанында Силәбе өлкәһенән Сергей Степаненко тигән урыҫ милләтле кеше: "Бөгөн федераль каналдарыбыҙ аша тарих яҡтыртыламы? Юҡ, тиерлек. 1812 йылғы Ватан һуғышы хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Был - беренсенән. Икенсенән, 1812 йылғы Ватан һуғышы, 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы тураһында фильмдар күрһәтелә икән, уларҙа геройҙар кемдәр? Рәсәй халыҡтарымы, әллә урыҫ халҡы ғынамы? Ысынлап та, телевизор ҡараһаң, Рәсәйҙә урыҫтарҙан башҡа халыҡ юҡ микән ни, тигән уйға киләһең. Урыҫтар менән бергә ошо яуҙарҙа көрәшкән башҡа халыҡтар бөтөнләй телдән төшөп ҡала. Күп милләтте дәүләттә тап уртаҡ еңеү фактына баҫым яһалырға тейеш. Беҙҙең Рәсәй халыҡтары араһындағы дуҫлыҡ ауыр мәлдәрҙә сынығыу үткән. Башҡорттар был йәһәттән бигерәк тә тоғролоғо менән айырылып торған, ауыр мәлдәрҙә бер ҡасан да Рәсәйҙе ташламаған..." - тигән һүҙҙәр әйтә. Бик дөрөҫ әйтә был урыҫ кешеһе. Сөнки Әхмәтзәки Вәлиди һымаҡ шәхестәр уларҙың тирмәненә һыу ҡоймай. Улар уны белмәй һәм белергә лә теләмәй. Шуға күрә дүрт телдә сыҡҡан был китапты киләсәктә, бәлки, ун телле лә, егерме телле лә итергә кәрәктер. Шунан һуң, һәр телдә сыҡҡанын егермешәр генә кеше уҡыһа ла, файҙа булыр ине. Тимәк, беҙгә туҡтауһыҙ рәүештә "Вәлиди" тип, туҡылдап торорға кәрәк.

Килешәм, был фотоальбом менән генә сикләнеү һис тә дөрөҫ түгел. Киләсәктә Әхмәтзәки Вәлиди тураһында китаптар ғына түгел, музейҙар, һәйкәлдәр, нәфис һәм документаль фильмдар төшөрөлөргә, романдар, шиғырҙар, драма әҫәрҙәре яҙылырға тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Әхмәтзәки Вәлидигә торорлоҡ кем шиғыр йә поэма яҙғаны

*Ғөмүмән, әле булһа, XXI быуат башында ла, Әхмәтзәки Вәлидигә төрлөсә ҡараш йәшәй. Китапты эшләргә тотонғас, ҡайһы бер ағайҙар ҡабаланмаҫҡа ла кәңәш бирҙе хатта. Нисек инде, үҙ иленә бөтөнләйгә ҡайтҡан кешене лә беҙ лайыҡлы рәүештә күтәрә алмайбыҙмы инде, тинем мин уларға. Быға тиклем Вәлиди тыуған иленә, милләтенә төрлө китаптары аша әйләнеп ҡайтты. Ә фотоальбомда ул йәнле кеше булараҡ һынланыш ала. Миңә, нәшерсе булараҡ, китаптың төп авторҙары Ғәлим Хисамовтың, Тәлғәт Сәғитовтың, Әмир Юлдашбаевтың был эшкә оло яуаплылыҡ менән тотоноуына шаһит булырға тура килде. Китаптың төҙөлөш, тупланыш мәсьәләләрен Ғәлим Афзал улы үҙ өҫтөнә алды һәм был бурысын бик камил рәүештә атҡарып сыҡты. Рәссамыбыҙ Юрий Илингин та китапты биҙәү эшенә механик рәүештә тотонманы, иң тәүҙә Вәлидиҙең кем булыуы хаҡындағы материалдар менән танышып сыҡты.*

***✓ Ошонан һуң революция башланып китә. Петроградта мосолмандар съезы йыйыла һәм унда Вәлиди төп доклад менән сығыш яһай. Был докладты әҙерләр өсөн ул Финляндияға бара, мәсеттә ултырып докладын яҙа.***

# БЕҘҘЕ ҠҮТӘРӘ,

## күтәрергә тейеш

бар әле? Юҡ әлегә ундай шиғыр, ундай поэма.

Ҡыҫҡаһы, китап Әхмәтзәки Вәлиди тураһында булғаны өсөн генә беренсе урынды алды, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Бында иң беренсе нәүбәттә нәшерселәрҙең хеҙмәтен билдәләргә кәрәктер. Ә бына "Төрксой"ҙың баһаһы инде беҙгә бирелгән баһа.

Әхмәтзәки Вәлиди хеҙмәттәренең барыһын да мин уның беҙгә әйтелгән васыят һүҙҙәре итеп ҡарайым. Әгәр ҙә тереләр уның васыятын үтәмәй икән, шунан да ҙурыраҡ гонаһтың булыуы мөмкинме? Әгәр ҙә Әхмәтзәки Вәлиди төҙөп, беҙгә васыят итеп ҡалдырған Башҡортостанды беҙ һаҡлай һәм артабан күтәрә алмаһаҡ, ул саҡта беҙ гонаһынан башҡа бер нәмә лә күрмәйәсәкбеҙ. Ул сағында беҙҙең бүтән нәмәгә хаҡыбыҙ булмаясаҡ. Шуға күрә беҙгә әле эшләргә лә эшләргә кәрәк. Әлбиттә, мин бында фәҡәт Вәлиди тураһында ғына яҙырға кәрәк, тигән һүҙҙе әйтмәйем. Вәлидиҙе беҙ күтәрергә бурыслы, беҙҙән башҡа ул бер кемгә лә кәрәкмәй.

Әле беҙ үткән быуаттың 90-сы йылдарында булған рух күтәрелешенән күпкә ҡайттыҡ, күпкә төштөк. Ләкин был беҙ һәр ваҡыт шулай булырбыҙ, тигәнде аңлатмай. Килһен бер киҫкен мәл, ошондай китаптарға һалынған орлоҡтоң "р" ғына хәрефе лә халыҡты рух күтәрелешенә килтерәсәк. Һәр китап, һәр һүҙ, һәр хәреф шуның өсөн эшләнә.

**Ғ. ҒӘЛИМОВА:** Әхмәтзәки Вәлиди хаҡында йыл һайын бер-ике китап сығарырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Дәүләт тематик планы буйынса. Уның беҙ әле белмәгән хеҙмәттәре бик күп. Ә. Юлдашбаев нәшриәткә Ә.Вәлидиҙең оло хеҙмәтен тәҡдим итте. Әлегә 1-се өлөшө...

**▸ Башҡорт телендәге иң ҙур китаптар серияһын асып, шул китаптарҙың береһе - Салауат, икенсеһе Вәлиди хаҡында булырға тейеш, тип тә уйланыла...**

**Ғ. ХИСАМОВ:** Һис шикһеҙ кәрәк ундай китаптар серияһы.

**Ғ. ҒӘЛИМОВА:** Шул уҡ ваҡытта ундай китаптар һәр бер башҡорттоң кәштәһендә урын алырға тейеш. Икенсенән, хәҙерге йәштәрҙе тик китап уҡытып ҡына милли рухта тәрбиәләп булыуы ла икеле. Ғәлим Афзал улы, һеҙгә шундай һорау: милли рухлы батыр балалар ҡайҙа тәрбиәләнә һуң? Мәктәптәме? Институттамы? Ижтимағи ойошмаламы?

**Ғ. ХИСАМОВ:** Һәр кемдең үҙ өйөндә.

***Әхмәтзәки Вәлиди хеҙмәттәренең барыһын да мин уның беҙгә әйтелгән васыят һүҙҙәре итеп ҡарайым. Әгәр ҙә тереләр уның васыятын үтәмәй икән, шунан да ҙурыраҡ гонаһтың булыуы мөмкинме? Әгәр ҙә Әхмәтзәки Вәлиди төҙөп, беҙгә васыят итеп ҡалдырған Башҡортостанды беҙ һаҡлай һәм артабан күтәрә алмаһаҡ, ул саҡта беҙ гонаһынан башҡа бер нәмә лә күрмәйәсәкбеҙ. Ул сағында беҙҙең бүтән нәмәгә хаҡыбыҙ булмаясаҡ. Шуға күрә беҙгә әле эшләргә лә эшләргә кәрәк. Әлбиттә, мин бында фәҡәт Вәлиди тураһында ғына яҙырға кәрәк, тигән һүҙҙе әйтмәйем. Вәлидиҙе беҙ күтәрергә бурыслы, беҙҙән башҡа ул бер кемгә лә кәрәкмәй. Әле беҙ үткән быуаттың 90-сы йылдарында булған рух күтәрелешенән күпкә ҡайттыҡ, күпкә төштөк. Ләкин был беҙ һәр ваҡыт шулай булырбыҙ, тигәнде аңлатмай. Килһен бер киҫкен мәл, ошондай китаптарға һалынған орлоҡтоң "р" ғына хәрефе лә халыҡты рух күтәрелешенә килтерәсәк. Һәр китап, һәр һүҙ, һәр хәреф шуның өсөн эшләнә.***

**▸ Әхмәтзәки Вәлиди тураһында һөйләшеү рухиәт тураһында һөйләшеүгә боролоуы ла тәбиғи. Компьютер алдында ултырған баланың компьютерын ябып йә ситкә ҡыуып ебәреп, милли рух тәрбиәләү маҡсатында ҡулына башҡорт китабын тотторою ҙа дөрөҫ түгел бит. Бында милли рухты компьютерға индереү фарыздыр. Мөхәммәт тауға бармаһа, тау Мөхәммәткә бара. Икенсенән, хәҙер беренсе планға китап түгел, электрон технология, экран сыға икән, Әхмәтзәки Вәлиди тураһында нәфис фильм төшөрөү мәсьәләһе лә үҙенән-үҙе ҡалҡып сыға. Был шәхес тураһында фильм төшөрөргә, сценарий яҙырға ҡушһалар, һеҙ уны нисек итеп күрергә теләр инегеҙ? Рәсәй, донъя тамашасыһына Әхмәтзәки Вәлиди нимәһе менән ҡыҙыҡлы булыр ине?**

**Ғ. ҒӘЛИМОВА:** Зәкиҙең бәләкәй сағына уның ҙур кеше буласағына баҫым яһарға кәрәктер тип уйлайым. Ул атаһының мәҙрәсәһендә уҡый, Ислам диненән, тарихты әсәһенән өйрәнә. Фарсы телен дә өйрәнә. Ҡыҫҡаһы, уның тамырҙарын күрһәтергә кәрәктер. Ҡайҙан барлыҡҡа килгән һуң Әхмәтзәки Вәлиди? Бына ошо һорауға яуап эҙләргә кәрәктер. Башҡорт халҡының ғына түгел, тотош Рәсәйҙең, миллионлаған кешеләрҙең яҙмышын ыңғай яҡҡа үҙгәртер ҡөҙрәтте ҡайҙан алған Вәлиди? Уның феноменының асылы нимәлә? Бар донъяға оло шәхес булып танылыуында атаһы, әсәһе, дин, мәғрифәт, ул заман мөхите ниндәй роль уйнаған? Миненсә, фильмды ҡараусы ошо һорауҙарға яуап табырға тейештәр.

**▸ Әхмәтзәкиҙең атаһы Әхмәтшаһ атаҡлы шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлевтың мөрите була, ҡыҫҡаһы, Зәки был мөхиттә тойоп үҫә. Бер мәл Троицкиға шәйех янына барғанда Зәйнулла Рәсүлев һынамаҡҡа үҫмергә "Ал, улым, бәлки, берәй нәмә һатып алырһың", тип ун тинлек алтын аҡса тоттора. Шәйехтең мәҙрәсә янында күп һандағы кибеттәре була. Үҫмер бала логикаһы буйынса был аҡсаға тәм-том, шәрбәт алырға тейешле булған Зәки китап кибетенә инеп, Ғазалиҙың теологияны тәнҡит иткән бер әҫәрен, Мысырҙа һәм Истанбулда баҫылған һәм ислам ижтимағиәтенә һәм фәлсәфәһенә бағышланған нәшриәтте, астрономия һәм физика буйынса китаптар, Толстойҙың "Крейцерова соната" китабының һәм ҡайһы бер башҡа рус романдарының ғәрәпсә тәржемәләрен, французса өйрәнеү өсөн төрөксә яҙылған "Французса һөйләшеү китабы"н һәм бер рус китап лавкаһынан Толстойҙың мәмләкәтебеҙҙә 1891 йылда булған ҙур аслыҡ хаҡында һөйләгән "Аслыҡ йылдары" исемле әҫәрен һатып ала. Бына ҡайҙа күренә ул киләсәктәге мәшһүр ғалим, тарихсы, сәйәсмән һәм көрәшсе Әхмәтзәки Вәлиди. Мин фильмдың ошо ваҡиға менән башланырын теләр инем.**

**Ғ. ХИСАМОВ:** Рәшит Солтангәрәевтың минең хаҡта сығарған киң билдәле лаҡабына ярашлы, мин әле һөйләйәсәк күренеште күптән яҙғанмын инде. 1917 йылдың 27 феврале. Петроград. Февраль революцияһының башланыр сағы. Смольный янындағы һалдат казармалары. Вәлиди йәшәгән фатир ярым подваллы йортта урынлашҡан. Бында ул бер әрмән генералынан бүлмәне арендаға алып йәшәй. Бүлмәнең тәҙрәһе казармаларға ҡарап тора. Казармалар янында атыш башланғас, Вәлиди тәҙрәнән "Был нимә?" тип ҡулдарын эйәгенә терәп ҡарап тора ла: "Хоҙайым, ошо башланған ғәрәсәт халҡыма файҙа килтерһә ине",- ти. Быны Вәлиди Хоҙайҙан үтенеп һорай, һорап илай. Әхмәтзәки Вәлиди хаҡындағы нәфис фильмды мин ошо күренештән башлар инем. Был ваҡытта Вәлиди Рәсәйҙә барған сәйәси ваҡиғалар уртаһында ҡайнаған. Керенскийҙар, башҡалар менән аралашып йөрөгән, революцияның ҡотолғоһоҙ икәнлеген аңлаған. Шуға күрә һалдат казармаларындағы атыштың революцияға сигнал икәнен дә белгән. Бына шунан һуң Вәлиди Башҡортостандан килгән депутаттар йәшәгән урынға йүгереп бара. Ә ундағы депутаттар төнө буйына кәрт уйнап, тәмәке тартып, араҡы эсеп сыҡҡан була. "Һеҙ нимә эшләйһегеҙ ул? Донъя бит түңкәрелергә тора", - тип ҡысҡыра уларға Вәлиди. Тегеләр: "Ниңә түңкәрелһен, ти, һин беҙгә йоҡларға ҡамасаулама. Беҙ яңы ғына ойоп киттек", - тип яуап бирә.

Ошонан һуң революция башланып китә. Петроградта мосолмандар съезы йыйыла һәм унда Вәлиди төп доклад менән сығыш яһай. Был докладты әҙерләр өсөн ул Финляндияға бара, Стольголм мәсетенең имамы менән таныша һәм шул мәсеттә ултырып докладын яҙа. Доклад яҙып ултырғанда бер имам уның янына килеп, яңыраҡ ҡына был мәсеттә Вәлидиҙең ауылынан бер башҡорттоң булып китеүе хаҡында әйтә. Имам ул һалдаттан, Вәлидиҙе беләһеңме, тип һорай. "Нисек белмәҫкә, Зәки бит ул ауыҙының бер яғына сигара ҡабып, икенсе яғына яндырырға әҙерләгәнен ҡабып, кеҫәһенә 25 һумлыҡты күрһәтеп ҡуйып тығып, урамдың уртаһынан йөрөй торған кеше бит ул", ти Вәлиди хаҡында ауылдашы. Һалдат булған кеше Вәлидигә хәтәр характеристика бирә. Бындай һүҙҙәрҙе һалдат уйлап сығара алмай, уны уйлап сығарыуҙың кәрәге лә юҡ. Әммә ошо ғына һүҙҙәрҙә лә беҙ Вәлидиҙең ниндәй кеше булғанлығын күҙ алдына килтерә алабыҙ. Вәлиди ошонан һуң мосолмандарҙың съезында сығыш яһай ҙа, Ташкентҡа сығып китә. Уның маҡсаты Төркөстан (хәҙерге Урта Азия) халыҡтарын революцияға күтәреү була. Уға "Нишләп үҙегеҙгә ҡайтып, башҡорттарыңды күтәрмәйһең?" тигән һорауға ул: "Башҡорттар минән башҡа ла күтәрелә ала", - ти. Вәлиди Ташкентта бик ҙур ойоштороу эштәре башҡарып, кире ҡайтып килеүгә башҡорт милли хәрәкәте инде съезға әҙер булып сыға. Уны вокзалда иң яҡын кешеләре ҡаршы алып, съезға әҙерлек хаҡында отчет бирәләр. Тағы ла ярты көндән һуң 1-се ҡоролтай башлана һәм унда башҡорт милләтенең үҙ дәүләтселеге иғлан ителә. Ҡоролтай ябылғанда Бабич сығып шиғыр уҡый һәм уның шиғыры "Йәшәһен Башҡортостан!" тигән һүҙҙәр менән тамамлана. Вәлиди хаҡындағы фильмдың тәүге серияһын мин ошо рәүешле итеп күрәм. Миненсә, был шәхес хаҡында бер нисә сериянан торған фильм төшөрөргә кәрәк.



**▸ Вәлиди хаҡындағы күп сериялы фильмдың мөхәббәткә арналғанын нисегерәк итеп күрергә теләр инегеҙ?**

**Ғ. ҒӘЛИМОВА:** Вәлидиҙең кәләше Зәйнулла ишан Рәсүлевтың ейәнсәре Нәфисә бик инсафлы, тәрбиәле, зирәк аҡыллы уҡымышлы зат була. Рәсәйҙә барған сәйәси ваҡиғалар уларҙы мәңгелеккә айыра. Шуға күрә фильмдың был өлөшө уның иң ғазаплы серияһы булыр ине.

**Ғ. ХИСАМОВ:** Вәлиди сит илгә сыҡҡас, ун ете йыл буйына Нәфисәне үҙенең янына алыуҙы юллай. Аҙаҡ тулыһынса өмөтө өҙөлгәс кенә үҙенең студенты Нәзмиәгә өйләнә. Былар хаҡында ла Вәлидиҙең аңлатмалары бар. Төркиәлә булғанда бер төрөккә Вәлидиҙең ун ете йыл буйына өйләнмәйенсә, Рәсәйҙә ҡалған кәләшен сит илгә сығарыуҙы юллап йөрөүе хаҡында һөйләгәйнем, Ислам дине ҡанундары буйынса йәшәүсе төрөктөң иҫ-аҡылы китте. Тимәк, Вәлидиҙең Нәфисәгә тоғролоғонда дини йоланы үтәү генә ятмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөйөк Ватан һуғышы алдынан төшөрөлгән "Салауат Юлаев" нәфис фильмы халыҡты изге яуға әйҙәүҙә, күңелен күтәреүҙә баһалап бөткөһөҙ роль уйнаған. Был йоғонтоно беҙ әле булһа тойоп йәшәйбеҙ. Әңгәмәлә ҡатнашыусылар әйтеүенсә, Әхмәтзәки Вәлиди хаҡында ла нәфис фильм төшөрөү күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Эшкә тотонорға ғына кәрәк. Беҙҙеңсә, был фильмдың сценарийын яҙыуға конкурс иғлан итеү ошо изге ҙур эштең бисмиллаһы булыр ине. Ғәлим Афзал улы дөрөҫ әйтә: халҡыбыҙға бик кәрәк Әхмәтзәки Вәлиди.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

# ҠАРА ӨКӨ

Һуңғы ваҡыт караоке һәм шуға тартым нәмәләр көнкүрешебеҙҙә ныҡлап урын алды. Кемгә нисектер, мин быны ҡабул итә алмайым. Бына бер саҡ Ырымбур башҡорттары ҡоролтайының бер сараһында башҡорт талиптары сығыш яһай. Магнитофон йә караоке ҡуялар ҙа, шуға бейейҙәр, йә ҡушылып йырлайҙар. Шәп түгел. Тере кеше тере ҡурай тауышы сығарһа, йөҙ тапҡыр артығыраҡ.

Беҙҙең Ырымбур яҡтарында быға оҡшаш әкәмәттәр бихисап инде ул. Бына, мәҫәлән, ҡайһы бер түрәләр башҡорт ауылдары мәктәптәрендә әсә телен уҡытыуҙы "ата-әсәләр теләге буйынса" индереү яғында бит. Милли мәсьәләне хәл итергә теләмәүҙе шундай мәкерле һылтау менән аҡларға маташыу инде был. Салауат Аҡдәүләтов зарлана: " Ә француз телен өйрәнергә ата-әсәләр теләгән һорамайҙар ҙа баһа!" Ә математиканы, физкультураны, башҡаһын, әйтәйек, мәктәпкә йөрөүҙе?.. Башҡорттар күпләп йәшәгән ерҙә әсә телен өйрәнеү Конституция нормалары менән гарантияланған. Беҙҙең түрәләргә быны аңларға ваҡыт та бит, аңламайҙар. Эйе, ҡайһы берәүҙәр өсөн мәсьәләне баштүбән әйләндереү бер ни тормай...

2005 йылда беҙ, ҡоролтай әүҙемселәре, Ырымбурҙан 200 саҡрым ятҡан Ҡыуандыҡ ҡалаһына киттек. Ғәҙәт буйынса, Ғәйфулла Агишев үҙ машинаһында, үҙ иҫәбенә алып барҙы беҙҙе унда. Район хакимиәте урынбаҫары Синягина ханым менән ҡалала үткәреләсәк башҡорт мәҙәниәте байрамы хаҡында һөйләшәбеҙ. Сарала сығыш яһарға милли коллективтар юҡ, шуның өсөн урыҫ үҙешмәкәр коллективы сығыш яһар, тип ысҡындырҙы ханым. Ә район башҡорттар һаны буйынса өлкәлә беренсе урында! Улай ярамағанлығын аңлатып бирергә тура килде түрә ханыма.

Яңыраҡ өлкәнең Аллабирҙе ауылында китапханасы булып эшләгән Гүзәл ҡыҙым: "Башҡорт туй йолаларының урыҫса тәржемәһе кәрәк ине", - ти. Йәнәһе, ошо йолаларҙы урыҫ телендә күрһәтмәкселәр. Тын ҡыҫылып ҡуя бындай әкәмәттәргә. Эт янындағы бесәй рәүешенә инергә тура килә ҡайһы саҡ. Зиһенде эшкә екмәйенсә, еңел юлды самалау артты хәҙер. Ҡотлауҙарҙы ла әҙер открыткалан уҡый ҙа ҡуялар бит, әй.

Һуҙемдең башы караоке һимаҡ заманa ҡаҙаныштарына бәйле ине. Сама белеп, аҡыл менән файҙаланһаң, ул нәмәләр ҙә, хатта әлеге открыткалар ҙа, зыян түгелдер. Әммә, мин әйтәм, караоке "кара өкө"гә әйләнмәһен ине. Алда бәйән иткәндән сығһаҡ, "кара өкө"-нөң күҙҙәре ябыҡ, дөрөҫө, уның күҙҙәре юҡ. Колаҡтары ла юҡ уның. Уның тирәһендә ҡараңғылыҡ һәм наҙанлыҡ хөкөм һөрә. Арыраҡ булайыҡсы ул тирәнән.

# ҠУРҠЫУҘЫҢ СИГЕ БАРМЫ?

Туҡһанынсы йылдар башы. Башҡортостанда Каруанһарайҙы башҡорттарға ҡайтарып биреү өсөн имзалар йыйыу бара. Ырымбурға ла тейешле бланкылар килде. Беҙ, Ырымбур башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзалары ла, ихласлап тотондоҡ был эшкә. Йүгереп йөрөп имзалар йыябыҙ, башҡорттар ғына түгел, башҡа милләт кешеләре лә мәсьәләне аңлай, хуплай, имзаһын ҡуя. Ә бер башҡорт ағайы ҡул ҡуйманы. Ни әкәмәт был, тиһегеҙме? Ҡурҡты ул. Байтаҡ һорауҙар тыуғайны шунда. Ҡурҡыуҙың сиге бармы? Нимәнән ҡурҡҡанынды белмәйенсә, ҡурҡып буламы? Тоталитаризм һеңдергән ҡурҡыу тойғоһо ҡасанға тиклем һаҡланыр? Хәҙерге йәштәрҙә ундай тойғо бармы?

...Ҡаланың көнсығыш ситендәге күп ҡатлы өйҙәр буйлап, кисен, эштән һуң, имза йыйып йөрөйбөҙ. Ул саҡта подъезд ишектәре бикһеҙ ине әле. Икенсе ҡаттағы фатирға шылтыратам. Астылар. Эстә музыка, шау-шыу, ҡунаҡтар йыйылған. "Мосолман ҡәрҙәштәр икән", тип уйлап алдым. Өсдүрт ир сыҡты. Русса ҡатыштырып һөйләнәләр ҙә, үҙебеҙҙекеләр. Аңлашыла, ҡыҙмасалар. Мин шыртлай төштөм. Бындай хәлдә иң ҡурҡҡаным - күҙлекте ватмаһындар. Мәсьәләне еткерәм тегеләргә. Берәһе ныҡ төпсөнә башланы: һин кем, фәлән-фәсмәтән, йәнәһе, донъяны бутап йөрөйһөң. Ҡағыҙҙарҙы алып йыртмаҡсы булғайны, улары, ҡулдан ысҡынып, иҙәнгә таралды. Юҡ, мин әйтәм, ҡағыҙҙарҙы бирмәйәсәкмен! Ҡағыҙҙарҙы тиҙ-тиҙ генә йыйып алдым да, тегеләрҙән ысҡынып, сығып ҡастым. Кәйеф ҡырылды, асыу ҡабарҙы, ҡурҡылды.

...Ырымбурға 1974 йылда килеп төпләнгәйнем. Бирҙе ҡасабаһы тимер юл аша ғына. Бүгәсәү менән Салауатыбыҙ осрашҡан бисҭәнe ҡыҙырып йөрөлә. Бер саҡ матур һынлы, матур йөҙлө башҡорт егете осраны. Ғаиләһе менән ошонда йәшәй икән. "Ә минең исемем Салауат, фамилиям - Юлаев. Ә йәшәйем мин Салауат Юлаев урамында!" - ти бит теге. Үәт әкәмәт! Шул ваҡытта ошо урамда батырыбыҙ хөрмәтенә таҡтаташ ҡуйыу фекере тыуғайны. Аллаға шөкөр, 30 йыл үткәс тормошҡа ашты. Илдар Бикмөхәмәтов тиғән милләттәшебеҙ ҡыҙыл граниттан бик зауыҡлы итеп был таҡтаташты батырыбыҙҙың 250 йәшенә алдан әҙерләп ҡуйғайны. Әммә түрәләр тарткылап-һуҙғылағас, был изге эш 2005 йылдың йәйендә генә тормошҡа ашты. Бик күп милләттәштәребеҙ дәртләнеп, ҡулынан килгәндә эшләргә тырышты. Ул саҡта өлкә ҡоролтайын Люциә Сәйетова етәкләй ине. Таҡтаташ балалар баҡсаһы бинаһына ҡуйылырға тейеш. Ошо мөхитте тәҙәкләндереүгә Рәйсә Исхаҡова, Ғәйфулла Агишев күп көс түкте. Бына көтөлгән ваҡыт етте. Люциә эшемә шылтырата. Бөгөн кисен таҡтаташты урынына ҡуйырға кәрәк. Аҡ миткалға төрөлгән яҙыулы таш ярты йылдан ашыу минең гаражда һаҡлана ине. "Аксис" фирмаһы директоры - Баймаҡ районы Төркмән ауылы егете Ғәбитов Рөстәм транспорт, инструменттары менән ике оҫта егетте ебәргән. Ринат Мортазин һәм Валерий Серебряков менән өсәүләп был яуаплы эште тормошҡа атҡарҙыҡ.

Иртәгәһен халыҡ йыйылды. Радио, телевидение, матбуғат хеҙмәткәрҙәре булманы. Ҡала хакимиәтенән килгән ханым көтөлмәгән шарт ҡуйҙы: ҡала депутаттары ҡарары буйынса таҡтаташта Пугачев хаҡында мәғлүмәт булырға тейеш түгел! Үәт әкәмәт! Бындай ғәләмәттәргә күнегеп бөткән ҡоролтай әүҙемселәренең дә күҙҙәре шарҙай булды. Гранитта шундай һүҙҙәр уйылған: "Улица названа в честь национального героя башкирского народа Салавата Юлаева, сподвижника Е.И. Пугачева в Крестьянской войне 1773 -1775 г.г.". Яҙыуҙың аҙаҡҡы өлөшөн, йәнәһе, ҡаплап ҡуйырға тейешбеҙ. Нишләргә? Украиндар, чечендәр, ҡырғыҙҙар килгән, тыныс ҡына көтөп торалар. Мин, хәлде бер аҙ йомшартыр өсөн, ҡурай уйнауымды дауам итәм. Рәйсә илап ебәрергә әҙер тора. Башҡортостандың Ырымбур өлкәһендәге вәкиле, өлкә советы депутаты Сергей Катасонов яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, таҡтаташты асырға рөхсәт бирҙе. Артабан барыһы ла һәйбәт үтте.

Бына шулай, ҡайһы бер түрәләр ниндәй булһа ла сараны, байрамды боҙорға әүәҫ инде, уныһына күнегеп бөткәнбеҙ. Бәгзеләре үҙ тарихынан үҙе ҡурҡыусан. Үҙ тарихын, үҙ тамырын хөрмәт итмәгән әҙәм бәхетһеҙ булыр, башҡаса булмаҫтыр...




# ХАЛЫҠ ҺАРЫҠМЫ?

2006 йылдың йәйендә Ҡыуандыҡ районы эргәһендәге Ишморат ауылы 240 йәшен билдәләне. Ҙур байрамда Ырымбурҙан бер нисә кеше ҡатнаштыҡ. Асыҡ һауала концерт бара. Гәзиткә материал йыйыу ниәтендә милләттәштәр менән әңгәмәләшеп йөрөп ятыла. Урындағы ҡоролтай етәксеһе пәйҙә булды. Тиктомалға: "Һин халыҡты бүлгеләп йөрөмә!"- тип әйтеп һалды бит был. Үәт әкәмәт! Быныһы нимә булды инде? Күп төшөргәнгә лә оҡшамаған үҙе. Янымдағы Рәйсә Исхаҡова аптырап та өлгөрмәне, минең "компьютер" яуапты тиҙ тапты. "Гәтиәт ағай, бүлгеләргә халыҡ һарыҡ түгел бит!" - мин әйтәм. Агаймы, ҡустымы был хөрмәтле милләттәш, башҡаса өндәшмәне...

Халыҡ һарыҡ түгел, тиһәм дә... 2005 йылдың көҙөндә Ырымбурҙағы "Йәштәр" һарайында Азат Айытҡоловтың концерты булды. Концерт бушлай ҡуйылды, зал шығырым тулы ине. Тамашанан һуң 67-се автобусҡа индем. Автобус тулы башҡорт һәм татар тамашасылары. Минең шундай ғәҙәт бар: бындай ваҡытта ҡысҡырып туған телемдә һөйләшәм, шаяртырға тырышам. Әле лә автобустың ал яғына баҫҡанмын да, оҙон кәүҙәле бер милләттәш менән концерт хаҡында фекер алышабыҙ. Шунда алдағы урындыҡта ултырған үгеҙ елкәле бер егет, муҡшы телендә булһа кәрәк, беҙҙең яҡҡа ҡарап ниндәйҙер һүҙ ысҡындырҙы. "Не понял..." - мин әйтәм. Шунда теге әҙәм әүҙем һөжүмгә күсмәһенме! "Понаехали тут, выйди отсюда вон!" "Вот акамат, - мин әйтәм. - Я же тебя не гоню". "А ты попробуй, погони!" - тип ҡысҡыра теге, ниндәйҙер өҫтөнлөк һәм ләззәт менән. Асыу килде. "Если я выйду, то ты тоже выйдешь!" - тием. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың: "Ҡуй, сыҡма," - тигән тауыштары ишетелә. Эйе, был егет минән ике тапҡыр ауырыраҡ, сыҡһаң, тар-мар итәсәк. Халыҡ алдында хур булғы ла килмәй. Көр тауыш менән эргәләге әле генә һин дә мин һөйләшеп торған егеткә: "Әйҙә сығабыҙ, кәрәген бирәйек бынауының", - тием. Ҡайҙа ул, ләм-мим өндәшмәне лә ҡуйҙы, бушаған урынға барып ултыра һалды, тәҙрәгә бороддо. "С тобой в разведку не пойдешь", - тип "маҡтап" ҡуйҙым уныһын. Яңғыҙ ҡалғанымды, берәү ҙә яҡламаясағын күрҙе теге уҫлаптай егет һәм урынынан тороп, мине сығыу яғына этекслэй башланы. 'Успокойся", - мин әйтәм, ҡаршылашып. "Ты воняешь, выходи!" - тип ҡысҡыра был. Шул көндәрҙә Мәскәү һәм Питерҙа урыҫ булмағандарҙы "воняешь, смердишь", тип ҡыйырһытыуҙар, туҡмауҙар, хатта үлтереүҙәр ҙә булып алғайны. Әгәр шундай провокация булһа, беләм, бер ниндәй ҙә милиция мине яҡламаясаҡ. Ваҡытты һуҙырға кәрәк. "Мин бында мең йыл йәшәйем", - тиһәм, аңламаясаҡ. "Я тебя не гоню", - тип тылҡыуымды беләм. Теге һаман мине ҡыҫырыҡлай. Үәт, әкәмәт, автобус тулы беҙҙең халыҡ, күбеһе мине танып белә, бер концерттан ҡайтып килабеҙ, береһе лә ярҙам итмәй бит әй! Ниһайәт, егет артында ултырған ике ҡатындың береһе: "Он же тебе в отцы годится!" - тип тегене оялтырға самаланы. Теге урынына сүкте шулай ҙа. Һуңынан белештем, ул ҡатындар егеттең биллегенән тартҡыслап урынына ултыртҡан икән. Рәхмәт төшкөрҙәр! Егет урында ултырған килеш мине "һүгеүен" дауам итә. Әгәр минең урында грузин һәм автобус тулы грузин булһа, был ватандаштың көнө бөтөр ине, тип уйлайым. Әгәр чечен булһам... Ул саҡта был егетте йәлләргә генә ҡалыр ине... Әле башҡорт булыуыма үкенергә ваҡыт юҡ, автобустан сығырға ваҡыт етте. Кондукторға: "Нишләп тыймайһығыҙ, нинә тәртипте ҡарамайһығыҙ?" - тигән булам. Үҙем, имен-аман сығып тайып буламы, юҡмы, шуны уйлайым. Йә, Аллам, шул саҡта иң арттағы рәттән ҡырҡ йәштән дә оло булмаған, тәпәшерәк буйлы, мыҡты кәүҙәле, түңәрәк йөҙлө башҡорт алға үтте. Азат Айытҡоловҡа оҡшаттым үҙен. Теге егет янында туҡтаны ла ҡаты ғына итеп: "Ты не прав!" - тип әйтеп һалды бит был. Шуныһы ҡыҙыҡ: әле генә геройланған егет уға яуап бирмәне. "Их, аҫыл егет! Ҡотҡарҙың бит мине бәләнән!" -тип, автобустан төшөп ҡалдым.

Уйлап киләм: халыҡ һарыҡмы, түгелме, кем ул? Әле минең өсөн халыҡ әлеге ике ҡатын үә ошо матур башҡорт егете. Ә ҡалғандары... Үҙем дә шул ҡалғандар иҫәбендә, бәлки, уға ла тормайымдыр, сөнки намыҫымды һаҡлап, "үгеҙ елкәгә" арыҫландай ажғырып ташланырға тейеш инем бит... Аҙна-ун көн кеше рәтенә инә алмай, йәнемдәге быҫраҡ менән йәшәлде. Хатта алты йыл элек вафат булған әсәйем рухы менән һөйләшеп ҡарау ҙа ярҙам итмәне. Бына әсәм - халыҡ, һарыҡ түгел. 70-се йылдың көҙө булһа кәрәк, ауылда инем. Йәш саҡ, көслө саҡ. Бер көн урамда ғауға сыҡты. "Урыҫ ҡымыҙы" менән әшнә, тыңғыһыҙ бер ағайҙы бер нисә егет ҡамап алған. Ҡыҙмасалар. Ағайҙы бөрөргә уйлайҙар. Ыҙғыш ҡыҙа бара. Тегеләрҙе араларға берәү ҙә сыҡмай. Ир-ат тамашасы булыуҙы хуп күрҙе, ахырыһы. Мин сығыуын сыҡтым. Артымдан әсәм сыҡты. Беләм, ул мине урам яғына бер аҙым да атлатмаясаҡ. Олатай йәшемә еткәнсе мине, һиғеҙ ҡошсоғоноң береһен, ҡурсалап йәшәне бит ул. Әле урамдағы хәл һуғышыу сигенә етте. Егеттәр аямаясаҡ, иҙәсәктәр хәҙер ағайҙы. Шул саҡ тәпәш кенә, тулыраҡ кәүҙәле, иҫке генә тун кейгән илле йәште уҙған ҡатын түңәрәк уртаһына ярып инә. Кем булһын, һөйөклө әсәм инде. Уң ҡулын юғары күтәрә был. Адмирал Нахимов йә Наполеон үҙе, тиерһең! Йән ғазабы менән "Разойдииись!" тип ҡысҡыра. Тынлыҡ урынлаша. Егеттәрҙең ҡулдары һәлберәп төшә, баштары эйелә. Таралышалар...

**Дауыт АМАНГИЛДИН.**
**Ырымбур ҡалаһы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БӘХЕТЛЕ БУЛЫУ ӨСӨН...

## үҙеңде бәхетле итеп той!

**Йөҙөнән йылмайыу китмәгән кеше һәр саҡ иғтибарҙы үҙенә тартып тора. Беҙ барыбер ҙә позитив һәм ыңғай тулҡындарға көйләнгән, ауырлыҡтарҙы зарланмай ғына үткәреп ебәрә белгән, "Хәлдәр нисек?" тип сәләмләгәндә "Хәлдәр шәп!" тип әйткән кешеләр менән аралашырға тырышабыҙ, сөнки ундайҙар тирә-яҡты рухландырыу, илһамландырыу, яҡтыртыу көсөнә эйә. Ошондай кешеләрҙең береһе тип иҫәпләйбеҙ билдәле йырсы, күп шиғыр һәм йырҙар авторы, продюсер Гөлдәр Ишкыуатованы. Уның позитивлыҡ тураһындағы фекерҙәрен тыңлайыҡ.**



### Позитивлыҡ - һәләтме, тәрбиәме?

Позитивлыҡ ҡайҙан барлыҡҡа килә? Тыумыштан һалынамы, әллә тәрбиә һөҙөмтәһеме был? Минеңсә, тыуғанда бар кеше лә бер төрлө була, ләкин генетик кимәлдә һәр балаға ата-әсәһенән, ғөмүмән, тамырҙарынан мәғлүмәт күсә һәм ваҡыт үтеү менән ул үҙен һиҙҙерә башлай. Позитивлыҡ та шул мәғлүмәттәр араһында була, тип уйлайым. Шул уҡ ваҡытта позитивлыҡ тик генетик кимәлдә генә була, тип тә дәлилләп булмай. Бәлки, ул тәрбиәгә лә бәйлелер? Бигерәк тә олатай-өләсәй тәрбиәһе бәхетен татыған кешеләрҙә позитивлыҡ асыҡ сағыла. Тәрән аҡыллы эйә оло быуын кешеләре бәләкәй бала күңеленә позитивлыҡ һалыу мөмкинлеген белә. Тик быны улар ҡоро һүҙ ярҙамында ғына эшләмәй, ә барыһын да үҙ өлгөһө, үҙ эше аша күрһәтә. Шулай уҡ улар тарафынан киң ҡулланылған әкиәт, кәрәк кенә ерҙә ҡыҫтырып ебәрелгән мәҡәл, әйтемдәр - барыһы ла балала аҡыл һәм шуның нигеҙендә позитивлыҡ та тәрбиәләй, тигән һүҙ. Ололарҙың бәләкәй саҡта: "Илағаныңды берүк кеше күрмәһен!"-тип иҫкәртеүе лә баланы оялтыуға ғына ҡайтып ҡалмай, минеңсә, ә үҙ негативынды, борсолоу һәм хәүефеңде тирә-яҡҡа сәсмәҫкә өндәү ҙә булып яңғырай. Динебеҙҙә гонаһ һаналған бойоғоу, бошоноу, уфтаныу кеүек күренештәрҙән алыҫ тороу кәрәклеген дә ололар матур итеп аңлата белә һәм ошоноң нигеҙендә, тимәк, балала позитивлыҡҡа юл аса.

**Тимәк, позитивлыҡты тәрбиә нигеҙендә формалаштырырға, үҫтерергә мөмкин һәм беҙгә, ата-әсәйҙәргә, олатай-өләсәйҙәргә ошоға булышлыҡ итеү өсөн тырышырға кәрәк. Балаларҙа позитивлыҡ тәрбиәләйек, туғандар!**

### Позитивлыҡты үҫтереүгә нимә булышлыҡ итә?

Үҙе позитив кеше эргәһенә лә ошондай уҡ кешеләрҙе йыя, сөнки тормошта беҙ нәҡ шундайҙарға тартылабыҙ, уның ыңғай энергияһынан көс һәм ҡеүәт алабыҙ. Алсаҡ, ихлас, бар ваҡиғала, бар тормош хәлдәрендә лә оптимист, ыңғай кеше менән аралашыу енел дә, күңелле лә, файҙалы ла, сөнки донъяла йәшәгән һәр көндөң, минуттың ҡәҙерен белгәндәр, тирә-яҡҡа нур сәсеп тороусылар күберәк булған һайын, башҡаларҙа ла позитивлыҡ осҡондары нығыраҡ дөрләй башлай. Позитивлыҡты үҫтереүҙә шулай уҡ төрлө хәл-ваҡиғалар, уйҙар, идеялар, хыялдар һәм башҡа күп төрлө донъяуи моменттар ҙа үҙ ролен уйнай. Шулай уҡ төрлө яҡлап үҙеңде үҫтереү өҫтөндә эшләү, китаптар уҡыу ҙа тормошта позитив булырға ярҙам итә, сөнки улар аңды формалаштыра, ыңғай яҡҡа үҙгәрергә мәжбүр итә.

**Тимәк, позитивлыҡты үҫтереүгә һәм нығытыуға сик юҡ. Ғүмер ебен һүткән һәр көндә лә был һәләтте киңәйтерлек кем менәндер аралашырға һәм һәр ваҡиғанан ниндәйҙер ыңғай моменттар табырға мөмкин. Эҙләйек һәм табайыҡ уны, дуҫтар!**

### Позитивлыҡ - тыныс аҡыл сығанағы

Бала саҡта, йәш ваҡытта кеше бәләкәй генә проблеманы ла ыйһан киңлегенән сығып баһалай, ҙурайта, күпертә, ваҡ ҡына мәсьәләнең дә сисеү юлын ҡатмарлаштыра һәм ауырайта. Тик йәшәй-йәшәй генә тормошто ысынлап та баһаларға, юҡ-барға үҙеңде сарыф итмәҫкә һәм донъялағы барлыҡ ваҡиға һәм мәсьәләгә тыныс ҡарап, аҡыллы эш итергә өйрәнелә. Барлыҡҡа килгән проблеманы самаһыҙ киҫкенләштермәй, донъяның рухи ҡиммәттәре алдында был мәсьәләнең ваҡ һәм әһәмиәтһеҙ икәнлеген яҡшы аңлау өсөн шул уҡ позитив булыуҙың да өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Сөнки нәҡ позитивлыҡ тормоштағы мөһим һәм әһәмиәтһеҙ нәмәләрҙең айырмаһын белеп эш итергә һәм юҡ-барға сәбәләнеп, тынғыһыҙлыҡ күрһәтеп бармаҫҡа ярҙам итә. Позитив ҡарашлы күп кеше йыйылған урында тормош та үҙ ҡатмарлығын юғалта, ҡүтәргеһеҙ булып күренгән ваҡиғаларҙың да әһәмиәте юйыла төшә.

**Тимәк, позитивлыҡ - тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итеүсе, барыһына ла тыныс аҡыл менән ҡарарға һәм кешегә үҙ күсәренән ысҡынып китмәҫлек мөмкинлек биреүсе һәләт ул. Позитивлыҡтан ситкә китмәйек, ҡәрҙәштәр!**

### Позитивлыҡ - принциптарҙы юйыусымы?

Позитивлыҡҡа ярамһаҡланыу, барыһына ла ярарға тырышыу һәм ошо сәбәпле үҙеңдең принциптарыңа, ҡарашыңа ҡаршы килеү хас булмаҫҡа тейеш. Позитив һәм алсаҡ булам тип, барыһы менән дә ризалашырға, бөтәһенең дә күңелен күрергә тырышырға ярамай, сөнки был позитивлыҡ түгел, ә иҫәрлек билдәһе булып күренеүе лә бар. Шулай уҡ "Юҡ" тип әйтә белеү ҙә позитивлыҡты бер ҙә кәмһетмәй һәм юҡҡа сығармай.

**Тимәк, позитивлыҡ - көсһөҙ, меҫкен, принципһыҙ кеше булыуҙы инҡар итә. Үҙ принциптарыбыҙға тоғро, ләкин тирә-яҡҡа мәрхәмәтле булайыҡ, милләттәштәр!**

### Позитивлыҡ хуш күңеллелекте ҡабул итмәй

Позитивлыҡ кешенең асылында, күңелендә, йөрәгендә булмаһа, ул был сифатын бер нисек тә күрһәтә алмаясаҡ. Ул көләп-йылмайып, күңелле кәйеф күрһәтергә тырышып, шаян һүҙҙәр һөйләп торһа ла, асыһында күңелендә ошо тойғолар юҡлығын күҙҙәре асыҡтан-асыҡ һөйләйәсәк, сөнки күҙҙәр алдай белмәй. Шулай уҡ тирә-яҡтағылар һиңә маңлай күҙе менән ҡараһа ла, күңел күҙе менән күрә икәнлеген оноторға ярамай. "Бәхетле булыу өсөн, үҙеңде бәхетле итеп тойорға кәрәк", тиҙәр. Был, ысынлап та, шулай. Донъя матурлығын тойоу һәм аңлау, тирә-яҡҡа оптимистик күҙлектән сығып ҡарай белеү - кешенең позитив тулҡындарға көйләнгән икәнлегенең асыҡ миҫалы ул.

**Тимәк, позитивлыҡ күңел түрендә, йөрәк төбөндә яралып, бөрөләнеп тышҡа сыҡҡанда ғына үҙенең тәғәйенләнешен, йәғни донъяны яҡтыраҡ һәм матурыраҡ итеү функцияһын үтәргә мөмкин. Һәр кемдең күңелендә позитивлыҡ йәшәһен!**

Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.

ЙӘШ ШАҒИР АУАЗЫ

# ОШО ХЫЯЛ МИНЕ ЙӘШӘТКӘЙНЕ,

## ошо хыял йыҡты күптәрҙе

**Рәшит Зәйнуллин бөгөн "Башҡортостан" гәзите хәбәрсеһе. Быға тиклем "Аҙна" гәзитендә эшләгән. Мәктәп йәшенән ижад итә. Шиғырҙары республика баҫмаларында донъя күреп тора. Шиғриәттең маҡсаты - кешеләрҙә изгелеккә, матурлыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылыш тыуҙырыу, уларҙа тормош һынауҙарына баш эймәй йәшәргә көс уятыу, тип иҫәпләй. Мендәрсә йылдар шиғриәт юғалмай йәшәп килгән икән, тимәк, унда бындай ҡеүәт бар...**

### Күбәләк

Сәскәләргә күмелгән гөл-баҡса,
Бар тирә-яҡ йәннәттәге кеүек,
Ошо хозурлыҡтың уртаһында
Илап тора малай башын эйеп...

Нимә булған уға, күҙ йәштәре
Ниңә тып-тып тамсы булып тама,
Ниңә йөрәккәйе әрнеп һыҙлай,
Ғазаптарға түҙмәй ярһып яна?

Көтмәгәндә керпектәрен һирпте,
Мин аңланым шул саҡ барыһын да:
Өҙгөләнгән, йәнһеҙ күбәләккәй
Ята ине үлән араһында...

### Хыял

Күккә осор, күкте ҡосор булам,
Был ҡалала күңел тарлыға,
Ҡанаттарым ташҡа һуғыла ла,
Ҡабаттан мин ергә йығылам...

Урмандарҙы бүре булып гиҙеү,
Бөркөт булып иңләү сиктәрҙе -
Ошо хыял мине йәшәткәйне,
Ошо хыял йыҡты күптәрҙе.

Тотҡон булып тыумағандар аңлар,
Был тормош бит сикһеҙ ҡуласа.
Азатлыҡҡа тилмергәндәр белә:
Ул тик зиндандарға юл аса...

### Йәйәүле

Был донъяла беҙ үткенсе генә...
Был донъяла беҙ бер йәйәүле,
Донъя һис яратмай үтенгәндә,
Ул яратмай һыҡтау-йәлләүҙе.

Юлыбыҙҙа атлылар ҙа осрай,
Осрай ерҙән шыуышыусылар,
Кемдер телем генә икмәк һорай,
Кемдер шуға уны ҡамсылай.

Кемдер йылан кеүек борғолана,
Кемдер оса ҡуҡтә ҡош булып,
Кемдер терпе кеүек энә сәнсә,
Кемдер көлә шуға иш булып.

Күпме йөҙҙәр, һүҙҙәр һәм хыялдар!
Кем тыуҙырҙы ошо донъяны?
Йәйәүлене кем ҡанатлы итте,
Кем хыялдар менән уйнаны?

...Юҡ яуаптар бөтмәҫ һорауҙарға,
Беҙ бит бында бары үткенсе,
Юлыбыҙҙан йәйәүләрбеҙ шулай,
Юлдарыбыҙ кинәт бөткәнсе...

### Һөтлө сәй

*Өләсәйемдең яҡты иҫтәлегенә*

"Кем булһаң да кеше булып ҡал һин", -
Тип әйткәйне миңә өләсәй,
Өләсәй юҡ хәҙер, аманаты
Ҡышҡы һалҡындарҙа - йылы сәй.

Икәү бергә серҙәр сисә-сисә
Эсә инек шулай һөтлө сәй,
Һин инде юҡ, иренемдә генә
Сәйең тәме ҡалды, өләсәй.

Тау башында яңғыҙ ҡайын булып
Әллә яулыҡ болғай өләсәй?..
Йылдар үткәс, һағындыра икән
Бала саҡта эскән һөтлө сәй...

Рәшит ЗӘЙНУЛЛИН.

ИНТЕРНЕТТАН



# АСЫҠ ҺАУАЛА...
## күнекмә лә файҙалыраҡ

■ Беркли университеты (АҠШ) ғалимдары белдереүенсә, көндөҙгө ике сәғәтлек йоҡо когнетив һәләттәрҙе яҡшырта. Көндөҙгө йоҡо алдынан алынған мәғлүмәт тә баш мейеһе тарафынан тиҙерәк эшкәртелә һәм яҡшыраҡ хәтерҙә ҡала. Әммә Гента университеты (Бельгия) кардиологтары оло йәштәгеләргә көндөҙ йоҡламаҫҡа кәңәш итә. Көндөҙ йоҡлап алырға яратҡан 65 йәштән олораҡ кешеләрҙә миокарда инфаркты һәм башҡа йөрәк-ҡан тамырҙары проблемалары хәүефе ҙурыраҡ була. Белгестәр иҫәпләүенсә, көндөҙ йоҡоға тартып тик торһа, эш бүлмәһен еллətеп алырға кәрәк, сөнки тап саф һауаның етешмәүе бының төп сәбәбе булыуы ихтимал. Ямғырлы көндөң дә йоҡлатыуы бар, сөнки был ике осраҡта ла атмосфера баҫымы түбәнәйә лә, баш мейеһе аҙыраҡ энергия ала.

■ Кешенең эсәктәрендә файҙалы бактериялар бәләкәй саҡта уҡ барлыҡҡа килә һәм әгәр ҙә был процесс ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында боҙолған булһа, серотонин бүленеү процесы ла ауырлаша. "Бәхет гормоны" серотонин кәйеф һәм тойғоларҙы яйға һалыуҙа ҡатнаша һәм уның кимәле стрестар һәм депрессиялар ваҡытында үҙгәреп тора. Ирландия милли университеты тикшеренеүселәренең сысҡандарҙа үткәргән һынауҙары күрһәтеүенсә, иртә йәштә был бактерияларҙың етерлек кимәлдә булмауы оло йәштәге сысҡандарҙың баш мейеһендә серотонин концентрацияһы кимәленә йоғонто яһай. Ғалимдар фекеренсә, бала бәләкәй саҡта эсәк микрофлораһын үҙгәртеүсе антибиотиктарҙы самаһыҙ ҡулланыуы, дөрөҫ туҡланмау баш мейеһенә генә түгел, ә тотош организмға йоғонто яһай.

■ Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тиҙәр. Әммә белгестәр физик һәм психик сәләмәтлек өсөн спорт залында түгел, ә асыҡ һауала, паркта спорт менән шөғөлләнергә кәңәш итә. Бигерәк тә депрессия һәм күңел тыныслығы таба алмаусыларға был файҙалы буласаҡ. Глазго университетының тикшеренеүселәре ошондай һығымтаға килгән. Аҙнаһына бер тапҡыр ғына паркта йүгереү йәки велосипед менән урманда йөрөү был проблемаларҙы ҡул менән һыпырып ташлағандай юҡҡа сығарасаҡ. "Асыҡ һауала, йәшел үлән һәм ағастар араһындағы күнекмәләр психик торошҡа ике тапҡырға яҡшыраҡ йоғонто яһай", - ти профессор Ричард Митчелл.

■ Нәркәс сәскәләре баш мейеһе ауырыуҙарынан файҙалы. Был сәскәләр шатлыҡ сығанағы ғына түгел, шулай уҡ депрессия һәм баш мейеһе ауырыуҙарын дауалауҙа ярҙам итә ала. Копенгаген университеты ғалимдары умырзаяларҙың һәм нәркәстәрҙең көньяҡ-африка төрҙәрендә үҙенсәлекле берләшмәләр барлығын асыҡлаған. Уларҙың мәғлүмәттәре буйынса, улар гемато-энцефалитик барьерҙы - ҡан әйләнеше һәм нервылар системаһы араһындағы физик ҡаршылыҡты еңергә булышлыҡ итә. Был барьер мейе гомеостазына ярҙам итә, нервылар туҡымаһын ҡандағы токсин һәм микроорганизмдар һаҡлай, тимәк, үҙенсәлекле фильтр булып тора һәм тик ыңғай ғына роль башҡара. Шул уҡ ваҡытта был барьер үҙәк нервылар системаһы менән бәйле күп ауырыуҙарҙы дауалауға ҡамасаулай, сөнки мейе аҡһымдарының артыҡ әүҙемлеге һөҙөмтәһендә "стена" аша дарыуҙарҙы үткәрмәй. Был аҡһым-транспортерҙар күҙәнәктәрҙе дарыуҙан тиҙ генә таҙарта һала. Нәркәстәрҙә табылған берләшмәләр хәҙер был проблеманы хәл итергә ярҙам итәсәк, ти ғалимдар.

РАМАҘАН АЙЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**Изге Рамаҙан айына аяҡ баҫабыҙ. Аллаһы Тәғәлә был изге Ҡөрьән Кәрим ебәрелгән айҙа үҙ ҡолдарына ҙур шәфҡәтлелек күрһәтә. Рамаҙан айында Йәннәт ҡапҡалары асыла, Йәһәннәм ҡапҡалары ябыла, мосолмандарҙы тура юлдан тайпылдыртмаһын өсөн шайтандар сылбырҙар менән бәйләнә. Хәҙистәрҙә: "Кешеләр Рамаҙан айының өҫтөнлөктәрен белһә, улар уның мәңге һуҙылыуын теләр ине", - тип әйтелә.**

# УРАҘА МӘКТӘБЕ ҮТКӘНДӘР...
## һәр һынауға әҙер була

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәхәбәләренең береһе Рамаҙан айына мөнәсәбәттәре тураһында шулай тип һөйләгән: "Беҙ Рамаҙан башланғансы ярты йыл буйы Аллаһы Тәғәләгә, ошо изге айҙы ҡаршы алырға насип ит, тип доға ҡыла торғайныҡ. Рамаҙан үтеп киткәндән һуң ярты йыл буйы Аллаһтан ошо айҙа ҡылған ғибәҙәттәрҙе, яҡшы ғәмәлдәрҙе ҡабул итеүен һорайныҡ".

Аллаһы Тәғәлә нәфсене яралтҡандан һуң уны тәрбиәләү һәм рәхмәтле иттереү маҡсатында төрлө һынауҙарға дусар итә. Хоҙай нәфсенән: "Һин кем һәм мин кем?" - тип һорай. Нәфсе тәкәбберлеген еңә алмайынса: "Һин - һин, ә мин - мин", - тип яуап бирә, үҙен Аллаһы Тәғәлә менән бер тиң ҡуйырға тырыша. Шунан Аллаһы Тәғәлә уны асыҡтыра. Асыҡҡас ҡына нәфсе үҙенең кем икәнлеген танырға мәжбүр була: "Һин бар ғәләмдәр Хакимы, мин һинең ҡолоң", - тип яуаплай.

Кешелә ике башланғыс йәшәй. Беренсеһе изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәгән фәрештәләр башланғысы булһа, икенсеһе түбән хистәргә тартҡан хайуан башланғысы. Кешегә ошо ике башланғыс, ихтыяр, бер ни тиклем һайлау мөмкинлеге биреләүе уны йә фәрештәләрҙән юғары изге зат итә, йә хайуандарҙан меҫкенерәк итеп, түбәнгә төшөрә. Нәфсегә һәм шәһүәткә ҡаршы торған, көн дауамында аҙыҡтан баш тартҡан, түбән теләктәрҙе ауыҙлыҡлай алған, ғәйбәттән телен һаҡлаған, ғәҙелһеҙлектән йыраҡ торған кеше фәрештә асылын ала, хатта фәрештәләрҙән дә юғарыраҡ күтәрелә.

Ураҙа тотоусының һәр сәғәте, һәр минуты, һәр секунды оло ҡиммәткә эйә. Сөнки ул Аллаһы Тәғәләне, Уның янына ҡайтасағын хәтергә төшөрә. Донъя ләззәттәренең ҡасан да булһа бөтөүен аңлай. Мәңгелек ҡиммәттәргә ынтыла башлай. Тәү ҡарауға, иртә таңдан ҡара кискә тиклем ашамаған, эсмәгән кеше ыҙалана кеүек. Ысынында иһә, ураҙаның алдағы мәңгелек тормошта ҙур сауаптар килтерәсәге, Хаҡ Тәғәлә ризалығына өлгәшеүгә сәбәпсе буласағы турағында ғы изге уйҙар уның ғазаптарын юҡҡа сығара. Ураҙа тотоусы көнө буйы үҙенең Хакимы тураһында уйлай. Уйҙары Аллаһы Тәғәлә турағында булғанға күрә, уның бар тормошо хаҡ юлда тәҙелә башлай. Ураҙалы кеше ифтар ваҡытында ике ҙур ләззәт ала. Беренсеһе -ауыҙ асҡандағы аҙыҡ менән килһә, икенсеһе мәңгелектә ураҙа тотоусы мөьминдәр өсөн генә әҙерләнгән Аллаһы Тәғәләнең бүләге. Мөхәммәт бәйғәмбәр, ураҙа тотоусы өсөн ике шатлыҡлы мәл бар, тигән. Улар - ауыҙ асыу мәле һәм Аллаһы Тәғәлә менән осрашыу мәле.

Аллаһы Тәғәлә ерҙе төрлө-төрлө муллыҡтар менән тултырған һәм уларҙы ерҙәге урынбаҫары - кеше ҡарамағына тапшырған. Көн һайын беҙгә яңынан-яңы муллыҡтар ебәрелеп тора. Ләкин беҙ йыш ҡына ошо һәнһыҙ байлыҡты ҡәҙерһеҙләп, беҙгә бирелгән ниғмәттәрҙең дә хужаһы бар икәнлеген бөтөнләй иҫкә алмай башлайбыҙ. Күптәр аслыҡ, мохтажлыҡ кисермәгәнгә күрә, Аллаһы Тәғәлә биргән ниғмәттәрҙе лайыҡлы рәүештә баһалай алмай. Ә ураҙа тотҡан кеше ауыҙ асыу мәленә ҡатҡан икмәктең дә Аллаһы Тәғәләнең оло ниғмәте икәнен аңлаясаҡ. Рамаҙан ваҡытында һәр кемгә Аллаһы Тәғәләгә ихлас рәхмәтен еткереү мөмкинлеге бирелә. Мөьмин: "Был ниғмәттәр баштан уҡ минеке булмаған, шуның өсөн мин уларға ябай аҙыҡҡа ҡараған кеүек ҡарарға тейеш түгелмен. Хаҡ Тәғәлә уларҙың хужаһы икән, Уның рөхсәте менән генә ҡулланырға хаҡлымын һәм рәхмәтемде белгертергә бурыслымын" - ти.

Бөтә ғүмерен ҡиммәтле һәм нәфис ниғмәттәр араһында үткәргән, асыҡыу һәм һыуға сарсау тигән тойғоларҙы белмәгән бай кешегә ураҙа фәҡирлек менән мохтажлыҡ "ләззәттәрен" татырға мөмкинлек бирә. Ошондай һынауҙарҙы үткән етеш тормоштағы кеше мохтаждарҙың хәлен аңларға өйрәнә, унайы сыҡҡан һайын уларға ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша. Фәҡирҙәргә танау өҫтөнән ҡарауҙан алыҫлаша. Бай кешенең күңелен йомартлылыҡ, мәрхәмәтлелек тултырған һайын, үҙенән фәҡирерәк йәшәүселәргә ҡарата шәфҡәтлелек тойғоһо арта. Ярлылар иһә уға ла мөхәббәт һәм ихлас хөрмәт менән ҡарай башлай. Был төрлө халыҡ ҡатламдары араһында синыф-ара күрә алмаусанлыкты юҡҡа сығара, йәмғиәттә тыныслыҡ һәм татыулыҡ урынлаштыра.

Ураҙа ярҙамында кеше социаль тормошон байыта, яңы бәйләнештәр урынлаштыра. Был бәйләнештәр донъяуи бәйләнештәргә ҡарағанда таҙараҡ һәм нығыраҡ була. Бергә ураҙа тотҡан, ифтар, сәхәрҙәрҙә ҡатнашҡан, тәрәүих намаҙҙарын уҡыған, Ҡәҙер кисәһен һәм Ураҙа-байрамды үткәргән мосолмандар араһында берберенә ҡарата ысын һәм таҙа мөхәббәт, хөрмәт, ярҙам тойғолары барлыҡҡа килә. Улар Бәйғәмбәребеҙҙән: "Бер береһенә ҡарата һөйөүҙә, мәрхәмәтлектә һәм миһырбанлылыҡта мөьминдәр бер организмға бәрәбәр. Берәй ағзаһы сиргә юлыҡһа, бөтә тән уның ауыртыуын тоя һәм уртаҡлаша", тигән хәҙисендәге берҙәмлеккә эйә була.

Ерҙәге етешлек, хозур тормош һәм именлек бер ҡасан да мәңге дауам итмәй. Көтөлмәгән сәбәптәр арҡаһында байлыҡ тиҙ арала ярлылыҡҡа, сәләмәтлек ауырыуға әйләнеүе ихтимал. Ошондай ҡаты һынауҙарҙы аҙағына тиклем лайыҡлы үтер өсөн кеше йөне менән дә, тәне менән дә уларға әҙер булырға тейеш. Ураҙа шундай һынауҙарға ҡаршы мораль яҡтан да, физик яҡтан да әҙерлек ул. Сөнки ул кешене оҙаҡ ваҡытҡа көндәлек хәжәттәренән тыйылып торорға өйрәтә. Бынан тыш, ураҙа камил кешегә хас принципиаллек һәм үҙ-үҙеңде ҡулда тота белеү кеүек характер һыҙаттары ла тәрбиәләй.

Ураҙа мәктәбен үткән кеше ҡыйынлыҡтарҙы, аслыҡты түҙемлек менән үткәреп ебәрергә өйрәнә. Бер ниндәй донъя хәжәте лә уны үҙ ҡоло итә алмай, сөнки ул кемгә таянырға кәрәклеге турағында яҡшы белә. Аллаһы Тәғәләне, уның бойороҡтарын, шул иҫәптән ураҙаны инҡар иткән кеше иһә мохтажлыҡ тигән ауыр һынау алдында һынасаҡ. Хаҡ Хакимдың ниғмәттәр баҡсаһын ҡалдырып, меҫкендәрҙең ишектәрен ҡағып, хәйерселеккә биреләсәк. Бындай әҙәм мең алтын һарайы булғанда ла меҫкен хәйерсе булып ҡаласаҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ**
**әҙерләне.**

# ИЗГЕ РАМАҘАН АЙЫНДА НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1433 һижри йыл.*

| Июль, август | Сәхәр ашап бөткән ваҡыт | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу. Ақшам намаҙы | Йәстү, тәрәүих намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20, йома | 04.08 | 04.38 | 14.30 | 21.05 | 22.35 | 00.10 |
| 21, шәмбе | 04.10 | 04.40 | 14.30 | 21.03 | 22.33 | 00.10 |
| 22, йәкшәмбе | 04.12 | 04.42 | 14.30 | 21.02 | 22.32 | 00.05 |
| 23, дүшәмбе | 04.13 | 04.43 | 14.30 | 21.00 | 22.30 | 00.05 |
| 24, шишәмбе | 04.15 | 04.45 | 14.30 | 20.59 | 22.29 | 00.00 |
| 25, шаршамбы | 04.16 | 04.46 | 14.30 | 20.57 | 22.27 | 00.00 |
| 26, кесе йома | 04.18 | 04.48 | 14.30 | 20.56 | 22.26 | 00.00 |
| 27, йома | 04.20 | 04.50 | 14.30 | 20.54 | 22.24 | 23.55 |
| 28, шәмбе | 04.21 | 04.51 | 14.30 | 20.52 | 22.22 | 23.55 |
| 29, йәкшәмбе | 04.23 | 04.53 | 14.30 | 20.50 | 21.20 | 23.50 |
| 30, дүшәмбе | 04.25 | 04.55 | 14.30 | 20.49 | 21.19 | 23.50 |
| 31, шишәмбе | 04.26 | 04.56 | 14.30 | 20.47 | 21.17 | 23.50 |
| 1, шаршамбы | 04.28 | 04.58 | 14.30 | 20.45 | 21.15 | 23.45 |
| 2, кесе йома | 04.30 | 05.00 | 14.30 | 20.43 | 21.13 | 23.45 |
| 3, йома | 04.32 | 05.02 | 14.30 | 20.41 | 21.11 | 23.45 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*



# ТӘН ҺАУЛЫҒЫ НЫҒЫНЫР...

## йәмғиәт сирҙәрен дауалау кәрәк

**Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ, филология фәндәре докторы, профессор:** Аллаға шөкөр, ятып ауырыған юҡ. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тиҙәр. Әммә тағы бер ҡанатлы һүҙ бар: сама самаһан үтмәһен. Дүрт тиҫтәгә яҡын йыл йүгереү менән шөғөлләнәм. Элек оҙон, ауыр дистанция һайлап, уны мөмкин тиклем ҡыҫҡа ваҡыт эсендә үтергә тырыша торғайным. Баҡтиһәң, улай ярамай икән. Йүгереүҙе атлау менән сиратлаштырып барырға кәрәк. Һуңғы ваҡыта тап ошо ҡағиҙәне иҫәптә тотоп йүгерәм. Спорт йүгереүе, ғөмүмән профессиональ спорт сәләмәтлек өсөн зыянлы. Рекордсмендарҙың ғүмере, ғәҙәттә, ҡыҫҡа була. Ә сәләмәтлек өсөн йүгереүҙең файҙаһы ифрат ҙур.

Яйы сыҡҡанда, йөҙөп тә алам. Әммә йөҙөү менән йөҙөү араһында ла айырма бар. Үҙем дә бер нисә тапҡыр хәүефкә тарыған булды. Әрмелә хеҙмәт иткән саҡ ине. Эҫе көндә тирләгән килеш һыуға сумып йөҙөп киткәйнем, көҙән йыйырҙы ла ҡуйҙы. Ярай әле, ҡулдар эшләне. Ҡан быуылһа, уны мотлаҡ сәнсеп тәндән сығарырға кәрәк. Ҡул менән семтеү ярҙам итмәй.

Иң кәрәкле күнекмә - ул гимнастика, тип уйлайым. Малдың малы ла бит гимнастика эшләй. Һикереп тороп китмәй, тәүҙә ергә ҡорһағын йәйеп кирелеп, һуҙылып ала. Ҡытайҙарҙың гимнастика яһау системаһы фәһемле. 2001 йылда бер ай Тибетта йөрөп ҡайттым. Шунда үҙләштергән ҡайһы бер күнекмәләрҙе файҙаланам. Ҡытайҙар гимнастиканы кирелеп, ҡабаланмай, яй ғына хәрәкәттәр менән эшләй. Әбеҙҙе мәктәптә киҫкен хәрәкәттәр яһарға өйрәттеләр бит инде. Йәнәһе, һөҙөмтәһе яҡшыраҡ буласаҡ. Белгән күнекмәләрҙе кирелеп эшләһәң, шул еткән, тигән ҡараштамын хәҙер. Ваҡытында радикулиттан ыҙалай инем. Мануаль терапияға йөрөп ҡараным, әммә һөҙөмтәһе булманы. Бер табиптың кәңәше буйынса, гимнастика эшләй башланым. Ғәҙәттә, баҫсала эшләгәндә арҡа ауыртып китә. Шул ваҡытта бүрәнәгә аша ятып алһаң, умыртҡа һөйәге урынына ултыра икән. Мин быны еңелерәк юлын табып алдым. Пластик һауытты һыу менән тултырам да шунда ятам, арҡа менән тәгәрәтәм. Һауытты елкәгә лә һалып ятам - был инде япондарҙың тәжрибәһенән. Өсөнсө һәм дүртенсе умыртҡа тапҡырына валик һалып ятырға кәрәк икән. Тиҙ йоҡлатып алып китә. Мин быны өсөн ҙур булмаған мендәрҙе файҙаланам. Ә йоҡлар урының ҡаты булырға тейеш. Карауатымда матрац юҡ, юрған ғына түшәгәнмен. Борон башҡорттар ҙа ҡаты урында - урындыҡта йоҡлаған бит.

Халыҡ медицинаһына ингән имтомда ла дөрөҫлөк бар. Күҙ тейеүҙән һаҡланырға кәрәк. Бала саҡта гел күҙ тейеп ауырығанмын. Ауылыбыҙ тирәһенән аҡҡан Агиҙел буйынан туристар үтә торғайны. Бала-саға өсөн был бер тамаша булғандыр инде. Апайым мине лә алып барған шунда. Минә бер йәш тә тулмаған булған. Бер мәрйә мине ҡуйыныа алып һөйгән, өстәүенә, "һатығыҙ минә был баланы", ти икән. Шул уҡ төндә ауырып киткәнмен. Өсөнсө көнгә, тәҙәлеүемә өмөт юғалтып, мине арыулап һалып ҡуйғандар. Әммә өшкөрөүҙәр барыбер ярҙам иткәндәр инде. Сир сигенгән. Күҙ тейеүҙән һаҡланып, мәктәптә тамамлағансы бетеүемдә сисмәнем. Ашай торғанын да, эсә торғанын да яҙып бирҙеләр минә бетеүҙең.

Хәҙерге йәштәрҙең күбеһе теш ауырыуҙарынан ыҙалай. Ә минең тиңдәштәремдең тештәре һаман да теүәл. Сөнки беҙ тәбиғи үлән ашап үҫтек. Заманы шулай булды. Яҙ етеү менән йыуа, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ йыябыҙ. Унан һуң балтырған китә. Балтырған ҡатыуға еләк өлгөрә. Тештәрҙең ныҡ булыуы шунан киләлер инде.

Физик сәләмәтлек хаҡында ғына һүҙ йөрөтөү етмәй. Сөнки физик һаулығыбыҙ йәмғиәттең сәләмәтлегенә бәйле. Ә бөгөнгө йәмғиәтебеҙҙең сирҙәре бик күп. Ул эскелек, наркоманлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ һәм башҡа кире күренештәр. Дәүләт үҙ граждандарын сәләмәт итеп күрергә теләй икән, иң тәүҙә ошо сирҙәр менән көрәшергә тейеш.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Һеҙҙең тәнегеҙ: физик камиллыҡҡа өлгәшеү

**"Әгәр миндә, мин быны эшләй алам, тигән ышаныс булһа, хатта ул тәүҙә булмаған хәлдә лә, мин тиҙҙән ошоно эшләү мөмкинлегенә ысынлап та эйә буласаҡмын", - тигән бөйөк Мхатма Ганди.**

Шуның һымаҡ, һеҙ эшмәкәрлектең бик ябай төрө: күнекмәләр эшләү иҫәбенә тормошоғоҙҙо үҙгәртә һәм уны яңы, тағы ла бейегерәк кимәлгә күтәрә алаһығыҙ. Кешеләр бер нисә йылға йәшерәк күренер өсөн хирург бысағы аҫтына ятырға, төрлө диеталар ҡулланырға, махсус кремдар һөртөргә әҙер. Ә шулай ҙа йәш күренеүҙең иң ябай ысулы - көн һайын бер нисә минут ниндәйҙер физик әүҙем формала булыу икәнен күптәр белеп тора. Бер ваҡытта ла, ваҡытым юҡ, тимәгеҙ. Әгәр һеҙ ысынлап та ниндәйҙер эш менән мәшғүл икән, физик күнекмәләрһеҙ йәшәй алмаясаҡһығыҙ.

Бөгөн үк тормошоғоҙҙа иң мөһим ҡарарҙарҙың береһен ҡабул итегеҙ - көн һайын физик күнегеүҙәр эшләргә. Әгәр бөгөнгө ниндәйҙер физик күнекмәләр программаһын эшләгән булһағыҙ, икенсе кимәлгә күсегеҙ һәм үҙегеҙгә оҡшаған спорт төрө ярыштарында ҡатнаша башлағыҙ. Шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: әгәр һеҙ алға бармайһығыҙ икән, тимәк, артҡа тәгәрәйһегеҙ.

Көн һайын башҡарған физик күнекмәләрҙән алынасаҡ бер нисә өҫтөнлөк:

- энергетика һәм иммунитет кимәле һиҙелерлек күтәрелер;
- дөйөм сәләмәтлек торошо нығыр һәм ауырлыҡ идеаль хәлгә килер;
- мускулдар тонусы һәм физик сынығыу юғары булыр;
- психика көсөргәнештән арыныр һәм тыныс торошта булырһығыҙ;
- ҙур энтузиазм һәм үҙ-үҙеңә ышаныс тыуыр;
- аңығыҙ тиҙ эшләр һәм етеҙлек барлыҡҡа килер;
- сәләмәтлеккә һәм ҙур әүҙемлеккә эйә булырһығыҙ ;
- тормошоғоҙҙоң барлыҡ өлкәләрендә лә тәртип урынлашыр;
- ҡан әйләнеше һәм кислород менән туҡланыуы әүҙемләшер;
- стрестарға ҡаршы тороу һәләтлеге артыр.

Физик камиллыҡ һеҙҙе башҡа теләһә ниндәй стратегияға ҡарағанда ла тулыраҡ ҡанлы тормош орбитаһына тиҙерәк сығарыр. Программаны ҡуллана башлап, һеҙ уға шул тиклем инеп китерһегеҙ, хатта ул теш йыуған кеүек көндәлек ғәҙәткә әүерелер.

Ваҡытығыҙҙы йәлләмәйенсә, эшләргә теләмәгән физик күнекмәләрҙе эшләмәүҙең биш кире әҙемтәһен яҙығыҙ. Унан һуң инде физкультура менән шөғөлләнә башлағандан һуң барлыҡҡа килгән 10 ыңғай өҫтөнлөктө яҙығыҙ. Исемлеккә быйыл, 5, 10 йылдан өлгәшергә теләгән үҙгәрештәрҙе һәм яҡшылыҡтарҙы индерегеҙ. Иртән торорға ялҡауығыҙ килеп, физик күнегеүҙәр менән шөғөлләнмәгән осраҡта күпме юғалтыуығыҙҙы һәм, киреһенсә, һәр көн күнекмәләр эшләгәндә күпме ҡәнәғәтлек алыуығыҙҙы тойорға тырышығыҙ.

**Робин ШАРМА.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Ультратауышлы тикшереү

**Медицина фәндәре докторы Татьяна Кожевникова, хәҙерге ваҡытта күпселек балаларҙа физик һәм аҡыл үҫешендә тотҡарлыҡ күҙәтелә, бары тик 15 проценты ғына мәктәп программаһын үҙләштерә, тип яҙа. РФ Оборона министрлығы хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙың 30 проценты сәләмәтлеге буйынса хеҙмәткә яраҡлы түгел, тип белдерә.**

Илдә "Себер" йәки "Урал" сәләмәтлеге менән данланыусы бер генә төбәк тә юҡ. Рәсәйҙәрҙең сәләмәтлеге ҡапыл насарайыуҙың сәбәбе нимәлә?

УЗИ кеүек заманса ҡоралдар ярҙамында әсә ҡарынындағы яралғы ҡат-ҡат тикшерелә, донъяға килгәс тә уны ошо уҡ ҡоралдар менән нурландырыуҙы дауам итәләр. Бәләкәй яралғы әсә ҡарынында УЗИ нурланыуынан ҡасып, ҡолаҡтарын ҡаплай, төрлөсә нурҙарҙан ҡасырға тырыша. Биология фәндәре докторы, ДНК-ны тикшереү менән шөғөлләнеүсе академик Петр Петрович Гаряев, тап яралғыны УЗИ менән нурландырыу һөҙөмтәһендә балалар төрлө ғәриплек, йәғни патология менән тыуа, тип белдерә. Ультратауыш ҡоролмаһы менән нурландырылғанда ДНК ептәре тарҡала, тимәк, организмдың үҫеш программаһы юйыла - күҙәнәктәр мутация кисерә, үҙгәрә! Ультратауыш менән нурланғанда барлыҡ күҙәнәктәр тарҡала! Ультратауыштың ошо үҙенсәлеген файҙаланып, ус аяһындай ғына кер йыуыу аппараттары уйлап таптылар. Ультратауыш биреүсе аппарат кер һалынған таҫҡа урынлаштырыла һәм ул керҙе таҙарта. Әммә фатирҙағы кешеләрҙең баштары ауырта башлай, хәлһеҙлек һиҙелә - нурланалар. Ультратауышлы уйынсыҡтар ҡулланыу ҙа шундай уҡ әҙемтәгә килтерә.

